ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

25-31 март (буранай) 2017

№ 12 (742)

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Мәктәпкә - милли кейемдә!**



5

**"Йәшерен хазина"ның ерҙәге биҙәге...**

Зәйнулла Рәсүлев тураһында бер кәлимә



6

**Иң яҡшы мәлдәрем...**

тотош тормошом баш ҡала менән бәйле



8-9

**Үҙебеҙҙең кәсептәрҙе**

тергеҙергә кәрәк, тинем...



12-13

**ТВ-программа** 14

***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! 31 мартҡа тиклем 2017 йылдың икенсе яртыһы өсөн "Киске Өфө"гә (индекс 50665) ваҡытынан алда арзаныраҡ хаҡҡа яҙылыу бара, йәғни был осорҙа баҫмабыҙға яҙылыу 469 һум 92 тин, ә Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары, I һәм II төркөм инвалидтары өсөн 423 һум 96 тин тәшкил итә.***

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## "Рәсәй милләте берҙәмлеге тураһында" тигән яңы закон проектындағы "Рәсәй милләте" һүҙбәйләнеше йәмәғәтселектә оло ғына шау-шыу тыуҙырҙайны. Хәҙер иһә был терминдан баш тартыу тураһында белдерҙеләр. Ошо уңайҙан фекерегеҙ?

***Константин ТОЛКАЧЕВ, БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай Рәйесе:*** Рәсәй - донъяла иң ҙур полиэтник державаларҙың береһе. Шул уҡ ваҡытта шуныһы ҡыҙыҡ: милләт-ара мөнәсәбәттәрҙе көйләүҙә хоҡуҡ ҡанундарының йоғонтоһо юҡ, тип әйтерлек. Был үҙ сиратында милләт-ара ерлектә килеп тыуған конфликттарға хоҡуҡи баһа биреүҙе ауырлаштыра. "Дәүләт милли сәйәсәте нигеҙҙәре" тип үҙгәртелгән бындай закон сығарыуҙы тулыһынса хуплайбыҙ, әлбиттә, ләкин уны артабан ғәмәлгә ашырыуҙан алда бындай ҡатмарлы документты теоретик кимәлдә күҙ алдына килтереүе лә бик ҡыйын. Ҡоро декларация ғына булмаһын өсөн был закон фараздар һәм нормаларҙы ғына түгел, санкцияларҙы ла үҙ эсенә алырға тейештер, тип уйлайым.

Конституцияла нығытылғанса, Рәсәй халыҡтар берләгән тәшкил итеүсе күп милләтле федератив дәүләт булараҡ формалашты. Шуға күрә законды эшләгәндә төрлө халыҡтарҙың үҙенсәлекле мәҙәниәте, йола һәм традициялары мотлаҡ иҫәпкә алынырға тейеш. Әгәр законда ошо факторҙар һанға һуғылмаһа, был өлкәлә хәл-ваҡиғаларҙы нindәй шарттар көйләйәсәге лә билдәһеҙ. Закон проектын әҙерләүсе авторҙарға милләт-ара хеҙмәттәшлек буйынса Башҡортостан Республикаһында тупланған тәжрибәне өйрәнергә тәҡдим итер инем, сөнки, ил Президенты Владимир Путин әйткәнсә, тап ошонда, бер тамсы һыуҙағы кеүек, бөтөн Рәсәй һәм уның мәҙәниәт, дин, телдәр төрлөлөгө һәм халыҡтар дуҫлығы сағылыш таба. Тап ошонда һәр төрлө этностарҙың үҙ-ара ихтирам һәм тиң хоҡуҡлылыҡ нигеҙҙәрендә күп быуаттар бергә һыйышып йәшәү тәжрибәһе тупланған. Тап бына ошо миҫал яңы закон проекты концепцияһының нигеҙен тәшкил итергә тейеш тә, тигән фекерҙәмен.

(Дауамы 2-се биттә).

АФАРИН!

# "ШАЯНИУМ" ЕЛЛЕ ШАЯРТА!

**Өфөнөң "Шаяниум" шаяндар һәм тапҡырҙар конкурсының ойошторолоуына 15 йыл да булып киткән икән. Был юлы уның ҡатнашыусылары һәм көйәрмәндәре бәйгенең юбилейын билдәләне. Ярыш башында бөтәһе ҡырҡ ете команда ҡатнашһа, финал уйынында уларҙың ун бише үҙ-ара көс һынашты. Иң шаян, иң отҡор, иң мәрәкәсел команда Өфө ҡала мәҙәниәт һарайының тамаша залында һайланды.**

"Шаяниум" ун биш йыл дауамында йыйылған иң сағыу, иҫтәлекле минуттарҙан торған видеояҙма ҡарау менән башланып китте. Унан һуң, конкурстың финал уйынына килеп еткән командалар сәхнә түренә күтәрелде. Тамашасылар шунда уҡ йыл һайын үткәрелә килгән конкурс "олоғая" барһа ла, ҡатнашыусылары "йәшәрә", быуындар бер туҡтауһыҙ алмашына килеүенә иғтибар итте. Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары Сынтимер Баязитов та уйынсыларҙы һәм тамашасыларҙы тәбрикләгәндә ошо турала телгә алды.

- Бөгөн конкурсты тамаша ҡылырға килгән коллегалар, конкурс йәшәрә, тигән фекер әйтте, - тине Сынтимер Биктимер улы. - Сөнки беҙҙең "Шаяниум" йәштәр өсөн матур йолаға әүерелеп, башҡортса шаяртыу, көләмәс һөйләү оҫталығы быуындан-быуынға күсерелә башланы. Ҡасандыр ошо сәхнәлә сығыш яһаған балалар бөгөн республика, ил кимәлендә билдәле шәхестәр. Бында баҫып торған дәртле, шаян, талантлы балалар уларҙан өлгө алып йәшәһә, беҙҙең киләсәккә ышанысыбыҙ ныҡлы, тигән һүҙ...

Конкурстың финал уйынында бик көслө командалар сығыш яһаны. Уйындың төп темаһы "Ағас тамырына ҡарап үҫә", тип билдәләнгәйне. Һәр команда уны үҙенсә асты. Шуҡ һәм оҫта мәрәкәселәрҙең күҙ уңынан мәғариф, мәҙәниәт, сәйәсәт, иҡтисад, йәмәғәт проблемаларына ҡағылышлы бер актуаль тема ла ситтә ҡалманы. Тамашасылар араһында ултырған оло быуын кешеләре хатта күҙҙәре йәшләнгәнсе ихлас көлдө. Сөнки балаларҙың көләмәстәре улар көн дә күргән, йә үҙҙәрен аптыратҡан ваҡиғалар, ололарҙың ҡылыҡтары, кешеләр араһындағы мөнәсәбәттәр тураһында ине.

(Дауамы 4-се биттә).




Еңеүселәр - "Етегән+1" командаһы.

12+

✔ ***Карталарҙа ер-һыу атамаларыбыҙҙы дөрөҫ итеп яҙырға кәрәк. Ғәмһеҙлектән сыға алмаһаҡ, Мәсем тауыбыҙҙың да, Шүлгәнташ мәмерйәһе "Капауай"ға әйләнгән кеүек, Максим тауы булып китеүе бик ихтимал.***



*КИЛЕШМӘЙЕМ!*

# ТУРИСТ КАРТАЛАРЫНДА...

## атамалар дөрөҫ яҙылһын!



**Һуңғы йылдарҙа республикабыҙҙа туризмды үҫтереү буйынса күп кенә эштәр башҡарыла. Әммә турист маршруттары төҙөгәндә яуаплы ойошмалар һәм кешеләр ныҡ иғтибарлы булһындар, халҡыбыҙҙың тарихына, ер-һыу атамаларыбыҙға хилафлыҡ эшләмәһендәр ине, тигән теләк бар. Ә был теләк юҡтан ғына тыуманы, уның күҙгә күренеп торған сәбәптәре бар.**

Ошо арала интернеттағы "Башҡорт Уралы" биосфера резерваты" сайтындағы: "Есть места, до которых трудно добираться и откуда уезжать-то не хочется... Тем, кто выбирает маршрут для сплава, советуем обратить внимание на интересное предложение национального парка "Башкирия" - сплав по Нугушу от Галиакберова или Бритяка до Сергеевки. Путь пролегает через кордон Кашаля, где созданы все условия для туристов", - тип яҙылған мәғлүмәттәр миндә ҙур ҡыҙыҡһыныу уятты. Берҙән, Ғәлиәкбәр - үҙемдең тыуған ауылым, икенсенән, әсәйем Кәшәләлә тыуып үҫкән. Кәшәлә киләсәкһеҙ ауылдар исемлегенә индерелгәс, халҡы Бөрйән районының Үрге Нөгөш (Ямаш), Мәкҫүт, Ғәлиәкбәр ауылдарына таралып ултырған.

Маршруттағы ауылдарҙы картанан барларға тотондом. Ә бына Сергеевкаһы ниндәй ауыл икән һуң? Атайым менән әсәйем һалға сыҡҡанда бер ҙә ул ауыл тураһында һөйләмәй торғайны бит, тип, интернеттан Мәләүез районының бөтә ауылдарын байҡап сыҡтым. Ә унда шулай тип яҙылған: "На правом берегу р. Белой на карте 1786 г. показана деревня Ташево, которая позже была названа Сергеевка (Сергушкино). Название - от антропонима, по имени основателя деревни - **Саргая** (правильнее было бы назвать ее по-русски Саргаево). Возникла в середине XVIII в. Это одна из деревень, переведенных из ведомства Оренбургского в Стерлитамакский уезд. Известны сыновья основателя деревни Саргая. Это 1739 года рождения Янсура (его сын Алтынса), Табулды (его дети Аллаберды, Ярмакай) Саргаевы. Был и хутор под названием Саргаево с 4 дворами, где жили 17 человек".

Был юлдарҙы уҡып, өнһеҙ ҡалдым. "Правильнее было бы ее назвать по-русски Саргаево", тип, йөйә әсенә яҙып ҡуйғандар ҙаһа. **Нимә ҡамасаулаған һуң Һәргәйҙе русса Сергеевка түгел, ә Саргаево тип яҙырға?** Алтаҡталарҙағы хаталарҙы фотоға төшөрөп, әленән-әле матбуғат биттәрендә күрһәтеп, төҙәтеп торалар. Ә бында хәреф хатаһы ғына түгел, ауылдың халҡына, тарихына ҡарата ҙур хилафлыҡ, дошмансылыҡ ҡылынған. Әсәйем яғынан миләнең ата-бабаларымдың тыуған төйәге, башҡорт ауылы Һәргәй ҡасандан алып Сергеевка булып киткән?

Ауылдарҙың исемен урыҫсаға үҙгәртеп, өнһеҙ-тынһыҙ ғына ерҙәребеҙҙе, халҡыбыҙҙың үткәнен, тарихын, рухи байлығыбыҙҙы һатабыҙ түгелме? **Ата-бабаларыбыҙ ошо ерҙәребеҙ өсөн быуаттар буйына көрәшеп ҡан ҡойған, ә беҙ ер-һыуҙарыбыҙҙың атамаларын да һаҡлай алмайбыҙ. Ошонан да ҙур гонаһ юҡтыр ул донъяла.**

Башҡортостаныбыҙҙа турист маршруттары асыла, карталар төҙәлә - бер яҡтан, был ҡыуаныслы хәл, әлбиттә. Ләкин бер ерҙә лә бер кем дә үҙ белдегенә ер-һыу атамаларын үҙгәртеп, урыҫса исемдәр менән яҙырға тейеш түгел. Һәр тауыбыҙ, яландарыбыҙ, урмандарыбыҙ, шишмәләребеҙ, йылға-күлдәребеҙҙең атамаларына бәйле ата-бабаларыбыҙҙан быуындан-быуынға мираҫ итеп ҡалдырылған хәтер, легендаларыбыҙ, риүәйәттәребеҙ бар. Бушҡа ғына башҡорт еренең һәр ташы тарих һөйләй, тимәгәндәр бит. Мине бигерәк тә бөткән ауылдар тирәһендәге ер-һыу атамалары борсолора. Улярҙы кемдәндер үҙ белдеге менән үҙгәртәсәге көн кеүек асыҡ.

Карта төҙөгәндә, бәлки, ярҙамым тейер, тип, ялан яғынан Кәшәләгә килгән арала ошондай ер-һыу атамаларын әсәйемдән һорашып яҙып алғайным: Үткәл яланы, Һәкәшле тауы, Үрек йылғаһы, Ягаҫ тауы (таштары теләнмә, ҡырҡты), Күперле тигән ер, Нөгөш буйында Оҙон туғай, Тохой туғайы, Икебаш тауы, Сана уй, Уҫаҡлы туғай, Ҡырын бит, тағы ла бөткән Сауҡа ауылы эргәһендә Аҡтамаҡ тигән ер, Ҡыҙбикә тауы бар. Кәшәләнең эргәһендә Тәҙүй, Йыуалы тау, Бөркөт ҡаяһы, Масаҡ, Ерекле тауҙары күренеп тора, Сауҡа яғынан килгәндә, Кәшәләнең эргәһендә Тайғаҡташ тигән ер бар. Тағы ла Нәҙершин Ғәбдин олатайымдың солоҡтары ултырған ерҙәрҙең атамаларын да һанап китте әсәйем, бына улар: Кужә, Ваҙраш, Буҫа, Сәтләүек йылғалары буйы, Кәшәлә башы, Сырпылы, Үтәмеш тау.

Маршруттарҙың карталарын төҙөргән алда ауыл хакимиәттәре тарафынан ер-һыу атамаларыбыҙҙы яҡшы белгән кешеләрҙән комиссия төҙөргә кәрәктер. Атамаларҙы оло кешеләрҙән һорашып яҙып алырға була, урман ҡарауылсыларыбыҙ һәр берейе үҙенең биләмәһен яҡшы белә бит. Нисек кенә булмаһын, карталарҙа ер-һыу атамаларыбыҙҙы дөрөҫ итеп яҙырға кәрәк. Ил ҡәҙерен белгәндең башы ҡәҙерле булыр, ти. Ғәмһеҙлектән сыға алмаһаҡ, легендаларға бай, данлыҡлы Мәсем тауыбыҙҙың да, Шүлгәнташ мәмерйәһе "Капауай"ға әйләнгән кеүек, Максим тауы булып китеүе бик ихтимал. "Улым, һинә әйтәм, киленем, һин тыңла", ти халҡым мәҡәле. Бөрйән, Мәләүез районының ер-һыу атамалары тураһында яҙһам да, республикабыҙҙың башҡа райондарында ла был мәсьәләгә бик етди ҡараһындар ине. Карталарҙа ер-һыу атамаларыбыҙҙың дөрөҫ яҙылышы Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетының да иғтибар үҙәгендә булырға тейеш, тип уйлайым.

**Шәһүрә ӘХМӘҘИЕВА. Учалы районы.**

*СЕТЕРЕКЛЕ ҺОРАУ*

# ҒАИЛӘЛӘ КҮРГӘН - ХЕҘМӘТ ҺӨЙГӘН

?

**ҺОРАУ: Ни өсөн бөгөнгө йәштәрҙең "елкәһе йоҡа"?**

***Хәлил ҺӨЙӨНДӨКӨВ,*** *яҙыусы:* Бөтә йәштәрҙе лә бер ҡалыпҡа һалып, ялҡаулыҡта ғәйепләү дөрөҫ булмаҫ. Шөкөр, үҙе тырышып белем алған, бер нисә юғары уҡыу йортон тамамлаған, сит илдәргә сығып та уңыш ҡаҙанған, юғары вазифалар билгән, үҙ эшен асып донъя көткән йәштәребеҙ ҙә бихисап. Әлбиттә, алаһы ла, ҡолаһы ла бар, тигәндәй, улар араһында ла төрлөләре бар. Бер аҙ ялҡаулаңып, эшләмәй типтерп йөрөгәндәрҙе лә күргән бар. Шулай ҙа, айыҡ, сәләмәт тормош көтөүсе, иманлы һәм аҡыллы йәштәр күпселекте тәшкил итә. Унан һуң, бөгөнгө заман йәштәрен эшһеҙлектә ғәйепләп тә булмай, уларҙы бит, беҙҙең замандағы кеүек, бер ерҙә лә әҙер эш урыны, уңайлы шарттар көтмәй. Бар һынауҙарҙы ла улар үҙ көсө менән еңеп сығырға бурыслы.

Ә инде хеҙмәт тәрбиәһенә килгәндә, тәү сиратта уға һөйөү ғаиләлә һалына. Шуға, кемдер берәүҙең балаһы ҡулына кәрәк тотмай икән, тимәк, уға быны бала саҡта атай-әсәйе өйрәтмәгән. "Атанан күргән - уҡ юнған, әсәнән күргән - тун бескән", тигән башҡорт халыҡ мәҡәле юҡтан ғына барлыҡҡа килмәгән бит. Һәр кем үҙе маһир булған эште балаһына ла өйрәтергә тейеш. Әгәр ҙә ауыл кешеһе үҫеп буй еткерер килгән улының бесәндә ярҙам итеүен теләһә, ул уны үҙе менән бергә йөрөтә, салғы тоторға, бесән сабырға өйрәтә.

Әйткәндәй, ауыл йәштәренә бирелгән хеҙмәт тәрбиәһенең ҡала йәштәре өлгө алырлыҡ яҡтары күп. Үҙем бына ауылға йыш ҡайтып йөрөйөм, унда йәшәгән таныштарҙың буй еткергән балалары баҡса мәшәҡәттәре менән дә булыша, мал да ҡараша, бесән эшләүҙә, еләк-емеш йыйыуҙа ла әүҙемдәр. Атай-әсәйе буш ултырырға форсат та бирмәй уларға, шуға ла һәр саҡ кәрәкле, үҙҙәренә файҙалы эш менән мәшғүлдәр. Ҡала йәштәренә килгәндә, уларҙың буш ваҡыты күп, көндәлек мәшәҡәттәре лә фатир эсендәге эштәрҙән артмай. Уларҙың компьютерҙа уйнарға, телевизор ҡарарға, урам буйында бер маҡсатһыҙ йөрөргә лә форсаты бар. Шуға ла, балаһының киләсәген уйлаған ҡала атай-әсәйҙәре уны төрлө түңәрәктәргә йөрөтөп, йыр-бейеүгә өйрәтеп, өҫтәмә дәрестәрҙә шөғөлләндереп булһа ла хеҙмәткә йәлеп итергә тырыша.

Бына шулай, хеҙмәт тәрбиәһенең нигеҙе - ғаиләлә, унан инде мәктәптә ошо эш дауам ителергә тейеш. Һуңғы йылдарҙа мәғариф өлкәһендәге үҙгәрештәргә бәйле хеҙмәт тәрбиәһе үҙгәрҙе йә бөтөнләй иҫәпкә алынмай башланы, элекке эшкә өйрәтеү дәрестәре хәҙер ҡулланылмай. Мәктәптә, ғөмүмән, хеҙмәт тәрбиәһе көслө түгел, тиергә лә була. Уҡыусылар таҡта һөртмәй, сиратлап синыф бүлмәләрен таҙартмай, мәктәп баҡсаһында эшләмәй. Артабан тормошта кәрәге булмаған ҡайһы бер дәрестәрҙе уҡыу урынына хеҙмәт дәресе үткәрелеп, егеттәр хужалыҡ эштәрен өйрәнһә, ҡыҙҙар аш-һыу, ҡул эштәре серҙәренә төшөнһә, бик шәп булыр ине лә бит... Бына шулай, йәштәрҙе елкәһе йоҡалыҡта ғәйепләр алдынан үҙебеҙ биргән хеҙмәт тәрбиәһенең ғәмәлдә ниндәй булыуы тураһында фекер йөрөтөргә кәрәк.

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✔Мәскәүҙәге Манеж майҙанында түшәлгән гранит плитка Башҡортостан плиткаһы менән алмаштырыласаҡ. Бының өсөн республиканың "Урал таштары" компанияһы "Мансур" эре асыҡ көл төҫөндәге гранит сыҡҡан урынды эшкәртәсәк - ул үҙенсәлекле ҡиммәтле минераль сеймал сығанағы. Ошо урында сығарылған гранит - ныҡлы материал, ул бөтә төҙөлөш эштәрендә ҡулланыла. Эштәр майҙың икенсе яртыһында башланасаҡ һәм бөтә Манеж майҙанын биләп аласаҡ.

✔Өфөлә баш ҡала хакимиәтенең социаль-гуманитар идаралығы һыу баҫыу зонаһында йәшәүсе ҡала халҡы өсөн гуманитар ярҙам йыйыу иғлан итте. Гуманитар ярҙам эш көндәрендә иртәнге 9-ҙан киске сәғәт 6-ға тиклем Октябрь проспекты, 114/1 адресы буйынса ҡабул ителә. Белешмәләр өсөн телефон: (347) 235-96-19. Яңы өҫ кейеме һәм аяҡ-кейеме, тәүге кәрәк-яраҡ, санитар-гигиена әйберҙәре һәм оҙаҡ һаҡланыусы аҙыҡ-түлек (консервалар, ярмалар, сәй, шәкәр, он, макарон изделиелары) ҡабул ителә.

✔Фәйзи Ғәскәров исемендәге дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамбле Өфө тамашасыһы өсөн ҙур концерт программаһы әҙерләй. Коллектив 30 мартта һәм 20 апрелдә - үҙенең, 31 мартта "Башҡортостан" концерт залында сығыш яһай. Концерттар араһындағы тәнәфестә "гәскәровсылар" Силәбе (10 апрель), Мейәс (11 апрель) һәм Златоуст (12 апрель) ҡалаларына гастролдәргә сығасаҡ.

✔Башҡортостанстат мәғлүмәттәренә ярашлы, баш ҡаланың ягыулыҡ ҡойоу станцияларында дизель ягыулығының бер литры уртаса 38,28 һум тәшкил итте. А-76 (АИ-80) маркалы бензиндың бер литры 33,90 һум, АИ-92 - 35,68 һум, АИ-95 38,82 һум тора. Статистар билдәләүенсә, 2016 йылдың 21 марты менән сағыштырғанда Өфөлә бензиндың һәм дизель ягыулығының хаҡы 4,2-6,5 процентҡа артҡан.

✔Өфөлә, "ЛУКОЙЛ-Уралнефтепродукт" ягыулыҡ ҡойоу станцияларында бензин йәнә ҡиммәтләнде. Хәҙер АИ-95 маркалы бензиндың бер литры - 40, АИ-92 36,30 һум тора. Дизель ягыулығының хаҡы үҙгәрешһеҙ ҡалған - бер литры 39,13 һум. Компания бензинға хаҡты һуңғы тапҡыр февраль урталарында күтәргәйне.

**"Башинформ"дан.**

✓ Республикала 80 мең кеше йәшәгән 258 биләмәһен һыу баҫыуы ихтимал. Бигерәк тә йылға ярында, һыуһаҡлағыстар эргәһендәге һөҙәк урында урынлашҡан тораҡ пункттар әле үк һаҡланыу сараһын күрергә тейеш.



АФАРИН!



# "ШАЯНИУМ" ЕЛЛЕ ШАЯРТА!

**(Башы 1-се биттә).**

Өфө ҡалаһының 2-се башҡорт лицейы "Тағы ла ике" командаһы "Яҙ, яҙ, яҙ килә, мәктәпкә йөҙөп киләм", - тип йырлаһа, М. Кәрим исемендәге 158-се Башҡорт гимназияһының "Кендектәр" командаһы спортсылар ҡанында "три-бишбармаҡ-ҡымыҙ-мети-ҡорот-април" матдәһе табып "ярышҡа үткәрмәне". Тик ҡыҙҙар ғына уйнаған уникаль "Сәтәкәй" командаһы, үҙҙәре әйтмешләй, "ҡаты ҡатындарский юмор" алып килгәйне. Уларҙың тамашаһы - төрлө тематикаға арналған мәрәкәле йырҙары ысынлап та бик үҙенсәлекле килеп сыҡты. Башҡорт теле дәүләт теле булараҡ өйрәнелгән мәктәптәрҙең командалары ла конкурсҡа бик етди әҙерләнгәйне: шартлатып башҡортса көләмәстәр һөйләне улар.

Ғөмүмән, һәр команда быға тиклем бер ҡайҙа ла яңғырамаған мәҙәктәр һөйләп, быға тиклем береһе лә иғтибар итмәгән көлкөлө күренештәрҙе сәхнәләштереп күрһәтте. Быйыл "Ҡырғаяҡтар" командаһынан "Иң яҡшы ир-егет роле"н башҡарыусы Фирҙәүес Арыҫланов, "Һупайлы дәрүиштәре" командаһынан "Иң яҡшы ҡатын-ҡыҙ роле"н уйнаған Аделина Ғәлиәкбәрова бөтәһенең дә иҫендә ҡалғандыр, моғайын. Әлбиттә, "Шаяниум" шаяндар һәм тапҡырҙар конкурсында өсөнсө урын яулаған "Башҡорттар.RU" (Республика инженер лицей-интернаты), "Һупайлы дәрүиштәре" (М. Исҡужин исемендәге 136-сы башҡорт лицейы), икенсе урынға сыҡҡан "XX централ" (Ф. Мостафина исемендәге 20-се башҡорт гимназияһы), "InterСпорт" (5-се Спорт профилле республика мәктәп-интернаты) , беренсе урын лауреаты "Ша-шу-ша" (122-се башҡорт лицейы) КВН командалары тамашасыларға онотолмаҫлыҡ күңелле минуттар бүләк итте. Конкурстың төп призын - Гран-прины яулаған 102-се башҡорт гимназияһының "Етегән+1" командаһы, һис шикһеҙ, тиндәр араһында тиң булды. "Был состав менән беренсе тапҡыр уйнайбыҙ "Шаяниум"да. Конкурс шарттары килгәс тә әҙерләнә башлағайныҡ, тырышлығыбыҙ бушҡа булманы. Еңеү яулауыбыҙға ышанып та бөтә алмайбыҙ, бик шатбыҙ!" - тип тәьҫораттары менән бүлеште "Етегән+1" командаһы уйынсылары.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Шаяниум" шаяндар һәм отҡорҙар конкурсында М. Исҡужин исемендәге 136-сы башҡорт лицейының "Һупайлы дәрүиштәре" командаһы "Шаяниум малай булһа, нәски бүләк итәйек, ҡыҙ булһа - мейе", - тип шаяртҡайны. Нәские нәски, әммә "Шаяниум"ға мейе мотлаҡ кәрәк. Мейе эшләгәндә генә хәтер ныҡлы була. Ә хәтере шәп кеше үҙенең белемендәге, тәжрибәһендәге бар мәғлүмәтте, шулай уҡ халҡының юморын да, үҙе теләгәнсә файҙалана белә. "Шаяниум" да белемле, аҡыллы, аңлы, хәтерле булһын, уға киләсәктә тағы ла олораҡ юбилей кисәләрен үткәрергә, үҙ артынан әллә күпме балаларыбыҙҙы эйәртеп, күңелдәрен үҫтерергә, туған телдә шаяртырға өйрәтергә, дуҫлаштырырға яҙһын!**

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

КӨН ХӘСТӘРҘӘРЕ

**Башҡорт халыҡ ижадында шундай әкиәт бар: әбей менән бабай берҙән-бер ҡыҙҙарын ер йөҙөндәге иң көслө йән эйәһенә бирергә теләй һәм бабай уны эҙләп сығып китә. Юлда барғанда боҙға тайып йығыла ла, уны иң көслөһө тип уйлай. Әммә боҙ үҙенең ҡояш нурҙары аҫтында ireп бөтөүен белдергәс, иң көслөһө булып ҡояш тойола. Ләкин ҡояшты ла болоттар ҡаплай... Әкиәт һуңында инде иң көслөһө кеше булыуы асыҡлана. Әкиәттә хәҡиҡәт бар, тиһәк тә, быйылғы ҡыш үҙенең кеше һәм техника алдында көслөрәк булыуын бер тапҡыр раҫланы инде - Яңы йыл байрамдарынан һуң ҡала тотош ҡар аҫтында ҡалды. Башта халыҡ зарланып ҡараны, артабан инде ҡала етәкселегенең көсөнә, ҡөҙрәтенә ышанып, күнде, тынысланды, шикелле...**

# КЕМ КӨСЛӨРӘК?

## Кешеме, тәбиғәтме?



Әлегәсә һауа атмосфераһы әллә ни йылынмаһа ла, һуңғы көндәрҙә ҡояш йылылығын мул өләшә башланы - ҡыйыҡтарҙан тамған тамсыларҙың йыры ла дәртлерәк яңғырай, урамдарҙа күләүектәр күләме лә арта бара. Етмәһә, тиҙҙән ямғыр ҙа вәғәҙә итәләр. Тимәк, тиҙҙән яҙ ысын мәғәнәһендә үҙенең хоҡуғын даулай башлаясаҡ һәм республикаға, баш ҡалаға мул һыу киләсәк. Ә был инде айырым территорияларҙы һыу баҫыу хәүефе менән янай.

Һуңғы йылдарҙа ташҡындың ғәҙәттән тыш хәлгә әйләнеүен халыҡ һаман да иҫләй әле. Мәҫәлән, 2013 йылда Белорет районының Ғәбдүк ауылы һыу аҫтында ҡалды, ҡеүәтле ташҡын йорт ҡаралтыларын ҡыйратты, тиҫтәләрсә баш мал һәләк булды. Абҙандан өс саҡрым алыҫлыҡта булған Ҡыҙыл Яр ауылы халҡы ла 2014 йылғы ташҡынды онотмаған: ул ваҡытта йорттарға һыу инә, ҡапҡаларҙы көслө тулҡын алып китә, ихаталар һыу эсендә ҡала. Малдарҙы кешеләр аҙбар баштарына мендерә, үҙҙәре өй ҡыйыҡтарына ҡунаҡлай. Күптәр йыһаздарын ҡотҡарырға ла өлгөрмәй.

Быйыл һыу кимәленең күтәрелеүе 8-9 метрға етеү ихтималлығы күҙаллана, "Башкиргидромет" етәксеһе Василий Лапиков белдереүенсә, 1979 йылда һыу кимәле хатта 10 метрға еткән була, әммә ул ваҡытта ҡыштың йылы булыуы һөҙөмтәһендә ныҡлап туңмаған ер ирегән ҡар һыуының өстән бер өлөшөн үҙенә һеңдерә. Быйыл иһә һуңғы 20 йылда иң көслө ташҡын булыуы ихтимал, сөнки ҡыш сатлама һыуыҡтарын да йәлләмәне, ҡарын да мул яуҙырҙы.

Ошоларҙың барыһын да иҫтә тотоп, Өфө ҡала округы хакимиәтенең сираттағы оператив кәңәшмәһендә ташҡын мәсьәләһенә ҙур иғтибар бүленде. Бөгөн 1800 кеше һәм 106 берәмек йөҙөү сараһы әҙерлек һыҙығында - улар һыу баҫҡан территорияларҙан кешеләрҙе эвакуацияларға әҙер. Иң ҡатмарлы участкалар булып Калинин ("Аҡбуҙат", "Речные зори" шифаханалары, Хәрби, Йылға буйы, Чехов, Строевой, Цимлянск, Фронт бригадалары, Азов, Ҡулса, Иҫке торф урамдары); Ленин (Нижегородка, Затон), Дим (Кинель, Туринская, Минск, Дүртөйлө, Киев, Павлик Морозов, Электровоз урамдары); Киров (Кооператив ялан, Өсөнсө пристань, Дудкино, Көньяҡ ҡасабаһы, Тирмән комбинаты) райондары тора. Граждандар милегенең йәки йыһаздарының зыян күреү хәүефен кәметеү маҡсатында район хакимиәттәре уларға страховка мәсьәләһен хәл итергә, шулай уҡ ҡар һыуын ағыҙыу тураһында хәстәрлек күрергә, авария хәл-торошо килеп тыуған осраҡҡа эш ҡоралдарын ҡул осонда торорға кәңәш итә.

Ләкин ташҡын Өфөгә генә янай икән, тип тынысланырға ярамай, Башҡортостандың Ғәҙәттән тыш хәлдәр буйынса дәүләт комитеты белдереүенсә, республикала 80 мең кеше йәшәгән 258 биләмәһен һыу баҫыуы ихтимал. Бигерәк тә йылға ярында, һыуһаҡлағыстар эргәһендәге һөҙәк урында урынлашҡан тораҡ пункттар әле үк һаҡланыу сараһын күрергә тейеш. Хатта элек ярҙарынан сыҡмаған бәләкәй йылғалар ҙа быйыл үҙ холҡон күрһәтеп алыуы мөмкин.

Һуңғы биш йылда Белорет һәм Йәрмәкәй райондары, шулай уҡ Октябрьский һәм Стәрлетамаҡ ҡалалары һыу баҫыу зонаһына инә. Белорет, Бөрйән, Архангел, Ҡариҙел, Саҡмағош райондарында боҙ тиҙерәк ireһен өсөн һибергә күмер, тығындар барлыҡҡа килгәндә шартлатыу өсөн 12 тонна шартлатҡыс матдә әҙерләнгән. Ҡотҡарыусылар Ҡариҙел, Бөрө, Краснокама райондарында Ағиҙел йылғаһының боҙон бысасаҡ. Шулай уҡ хәл-торошто 17 гидропост контролләй - улар Ағиҙел, Ашҡаҙар, Стәрле, Эҫем, Өфө, Әй, Йүрүҙән, Дим, Ҙур Эйек йылғаларынан тәүлегенә 4 тапҡыр мәғлүмәт тапшырып торасаҡ.

...Башта телгә алып үткән башҡорт халыҡ әкиәтендә кеше көсө данланһа ла, тәбиғәттең үҙ ҡанундары. Әллә ул кешелекте нимәнәндер иҫкәртергә тырыша, әллә тәбиғәт алдында үҙ көсөн күрһәтергә тырышып, яйлап ҡына уны юҡҡа сығарып барған, кеше тигән бөйөк исемде күтәреп йөрөгән йән эйәләрен шулай аҡылға ултыртырға тырыша - аңламаҫһың. Тәбиғәттең телен аңлауҙан күптән ситләшкәнбеҙ шул...

**Шәрифә САЛАУАТОВА әҙерләне.**

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Мәскәүгә бер тапҡыр файҙалана торған махсус һауыттарҙа Башҡортостанда етештерелгән ике тонналыҡ тәүге бал партияһы оҙатылды. Мәскәү мәктәптәрендә башҡорт балын һынап ҡараясаҡтар. Ай дауамында туғыҙ меңләп уҡыусы көнөнә 10-ар грамм бал ашаясаҡ. Билдәле булыуынса, Мәскәүҙә балалар туҡланыуын финанслау бюджетҡа һалынған. Бер балаға көндәлек 10 грамлыҡ өлөш өс һумға тура килә.

✓Өфөлә ремонтлау ҡаралған юлдарҙың яртыһы - ҡаланың төньяҡ өлөшөндә. 2017 йылда майҙаны 1,1 млн квадрат метрҙан ашыу тәшкил иткән 29 участканы ремонтлау күҙаллана. Шуларҙың 56 проценты ҡаланың төньяҡ өлөшөнә тура килә - 620,7 мең квадрат метр. Улар - Сельская Богородская, Ферин, Георгий Мушников, Сосновская, Чехов, Сипайлово, Маршал Жуков, А. Невский, Трамвай, Беренсе Май, Вологодская, Интернациональ, М. Горький, Ульяновтар урамдары кеүек мөһим ҡала магистралдәре.

✓Башҡортостандың баш ҡалаһында 25 мартта сираттағы ауыл хужалығы йәрминкәһе уҙа. Октябрь районында ауыл халҡы үҙ продукцияһын Спорт һарайы алдындағы майҙанда һәм Сипайлово биҫтәһендәге Рыльский урамындағы аллеяла тәҡдим итә. Орджоникидзе районында сауҙа ғәҙәттәгесә Орджоникидзе исемендәге мәҙәниәт һарайы алдында уҙа.

✓Төбәктәге "Башпромбанк" бренд булараҡ эшләүҙән туҡтай. Банкта 28 апрелдә "Башпромбанк"ты "Уралсиб" асыҡ акционерҙар йәмғиәтенә ҡушыу процесын тамамлау күҙаллана. Банк "Уралсиб" составында һәм бренды аҫтында эшләүен дауам итәсәк. "Башпромбанк" клиенттары өсөн кредиттар, ипотека һәм вкладтар буйынса бөтә шарттар клиенттарҙың килешеү срогы тамамланғансы һаҡлана, тип аңлатма бирҙеләр банкта.

✓Ял һәм байрам көндәрен һөҙөмтәле файҙаланыу маҡсатында Рәсәйҙең Хеҙмәт һәм социаль яҡлау министрлығы 2018 йылда ял көндәрен күсереү тәртибен нығытҡан Рәсәй Хөкүмәте ҡарарының проектын әҙерләне. Шулай итеп, 2018 йылда түбәндәге ял көндәре планлаштырыла: 2017 йылдың 30 декабренән 2018 йылдың 8 ғинуарына тиклем; 23 февралдән 25-нә ҡәҙәр; 8 марттан 11-нә тиклем; 29 апрелдән 2 майға ҡәҙәр; 9 май; 10 июндән 12-нә тиклем; 3 ноябрҙән 5-нә ҡәҙәр.

ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРЕ

# МӘКТӘПКӘ - МИЛЛИ КЕЙЕМДӘ!



**Был һүрәткә ҡарап, күптәр, был балалар йә сәхнәгә сығырға әҙерләнеп ултыра, йә уңышлы сығыш яһағандан һуң, ял итәләр, тип әйтер ине. Әммә улар төптә генә яңылыша. Ә бына дөрөҫ яуапты күптәребеҙ бирә лә алмаҫ ине. Быны тикшереп ҡарауы ла ауыр түгел. Әйҙәгеҙ әле, мәҡәләне уҡыуҙы ошо урында туҡтатып, тағы бер тапҡыр һүрәткә күҙ һалайыҡ. Ысынлап та, милли кейем кейгән был балалар ҡайҙа һәм ни эшләп ултыралар икән?**

Ә бит мин үҙем дә тәүҙә был милли кейемдәге балаларҙы сәхнә менән бәйләгән инем. Әммә оло шатлыҡ, хатта ғорурлыҡ менән серҙе сисәйем әле. Эш шунда: был мәктәп балалары ошондай милли кейемдә уҡыуға йөрөйҙәр!

Башты бутамай ғына был күренеште яйлап аңлатайым әле. Бер мәл миңә Баймаҡ районының бер ауыл мәктәбенә эш буйынса барырға тура килде. Мәктәп директоры менән алдан һөйләшеп килешкәндән һуң юлға сығып та киттем. Юл һәйбәт, көн матур. Шуға күрә, һә, тигәнсе барып та еттем. Бына мин мәктәпкә килеп индем... һәм бер аҙға баҙап ҡалдым. Балалар мәктәптә хәҙер беҙҙең күҙ өйрәнеп бөткән ала-сыбар төрлө салбар-күлдәктә түгел, ә милли кейемдә йөрөйҙәр! Аптырамаған ерҙән аптырарһың да шул. Ә шулай ҙа түбәтәй кейгән камзуллы шаян малайҙарға, тәңкәләр менән биҙәлгән заурыҡлы күлдәк кейгән тыйнаҡ ҡыҙҙарға һоҡланмай ҡарау мөмкин түгел ине.

Шул мәл мәктәп директорынан һорай ҡуйҙым:

- Бөгөн берәй концерт-фәлән буламы әллә?

Директорҙың ябай ғына яуабы мине бер аҙ аптырауға һалды.

- Юҡ, ҡәҙимге уҡыу көнө.

Аптыраулы ҡараштарымды берсә мәктәп хужаһына, берсә, һаумыһығыҙ ҙа һаумыһығыҙ, тип эргәбеҙҙән тыйнаҡ ҡына үтеп киткән мәктәп балаларына йүнәлтәм. Миңең хәлде аңлап ҡалған мәктәп директоры ихлас көлөп ебәрҙе:

- Аптырауға ҡалғанығыҙ яңы төшөнөп ҡалдым, - тине ул. - Милли кейемдә йөрөгән уҡыусыларға ҡарап, аптырап ҡалғанһың икән. Ысынлап та, бөгөн мәктәптә бер ниндәй ҙә сара үтмәй, ә балалар дәрескә ошондай милли кейемдә йөрөйҙәр. Ә был матур башланғысты күптән түгел генә ҡуллана башланыҡ. Ата-әсәләр йыйылышында кемдер ошондай урынлы фекер әйтә ҡуйҙы. Хәҙер, тип башлағайны ул һүҙен, элекке һымаҡ анығ ҡына мәктәп формаһы юҡта инде, шуға күрә, әйҙә, беҙ балаларҙы мәктәпкә милли кейемдә йөрөтәйек. Хәҙер кем генә был турала тәү башлап һүҙ ҡуҙғатканын әйтә лә алмайым инде. Әйткәндәй, быныһы артыҡ мөһим дә түгел. Әммә шуныһының хәтерҙә ҡалған: ата-әсәләр бер аҙ өндәшмәй ултырҙы ла бал ҡорто күсе һымаҡ гөж итеп ҡалды. Ҡыҫҡаһы, халыҡ был матур тәҡдимде дәррәү күтәреп алды. Әле бына шуны уйлап торам әле. Ата-әсәләр менән ҡайһы бер бик сетерекле мәсьәләләрҙе хәл итеү еңелдән түгел. Ә бына был тәҡдим хатта бер аҙ шатланыу-маһайыу менән ҡабул ителде. Һөйләшеү-кәңәшләшеү бик йәнле барҙы. Апаруҡ ҡына кәңәшләшкәндән һуң, ошондай дөйөм фекергә килдек. Милли кейемде тегеү-әҙерләү буйынса эш ярышҡа әйләнеп китмәһен өсөн һәр баланы бер тигеҙ кейендерергә кәрәк! Был ҡарар менән барлыҡ ата-әсәләр ҙә риза булды. Бына шунан китте инде эш ҡыҙып. Хатта ҡайһы бер өләсәй-инәйҙәр һандыҡ төбөндә генә ҡәҙерләп һаҡлаған милли кейемдәрен күрһәтеп, үҙ тәҡдимдәрен дә әйттеләр. Был матур сараны ауыл халҡы дәррәү күтәреп алғас, эш ҡарышманы. Эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнгән атай-ағайҙар кәрәкле тауарҙар алып ҡайтып та бирҙеләр, ә әсәй-еңгәйҙәр кис ултырып уларҙы тегеп тә ҡуйҙылар. Бына хәҙер балалар мәктәпкә оло быуын тегеп биргән кейемдә киләләр. Әле был матур кейемдә башланғыс синыф балалары ғына һәм аҙнаның йома көнөндә генә киләләр. Ағас күрке япраҡ, ә кешене сепрәк биҙәй, тип бушҡа әйтмәйҙәр икән. Башҡа уҡыу көндәрендә дыу килеп йөрөгән шуҡ малай-ҡыҙҙар йома көнө күпкә үҙгәрә лә ҡуя. Хатта улар бер аҙ олпатланып, тыйнаҡланып киткән һымаҡ булалар...

Мәҡәләмде тамамлап, шуны әйткем килә. Нимә сыҡһа, ошо Баймаҡтарҙан сыға, тигәндәй, уларҙың был матур башланғысын, бәлки, республика кимәлендә күтәреп алыу кәрәктер?..

**Әғләм ШӘРИПОВ.**

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

## ЯҢЫ КОРПУСТА

**Башҡорт дәүләт университетының яңы уҡыу-уҡытыу корпусы асылды. Ул Тукай урамында урынлашҡан. Туғыҙ ҡатлы бинала өс факультет - география, тарих, философия һәм социология факультеттары, шулай уҡ Иҡтисад, финанс һәм бизнес институты урынлашасаҡ.**

Бынан тыш, яңы бинала 120 урынлыҡ һигеҙ лекция амфитеатры, ике спорт залы (бәләкәй һәм ҙур), уҡытыусылар өсөн бүлмәләр, китапхана бүлеге урынлашҡан. Башҡорт дәүләт университетының яңы уҡыу-уҡытыу корпусын төҙөгәндә заманса технологиялар һәм материалдар ҡулланылған. Юғары уҡыу йортонон матбуғат үҙәгендә иҫкә төшөрөүҙәре буйынса, 1998 йылдың мартында Башҡортостан Республикаһы Президенты "Концерн БЭТО" бинаһын Башҡорт дәүләт университетына тапшырыуы хаҡындағы указға ҡул ҡуйған. 2006 йылда К. Маркс урамы, 3/4 адресы буйынса "Гуманитар" исеме алған "К" корпусы файҙаланыуға тапшырылды. Хәҙерге "И" корпусын йүнәтеү буйынса төп эштәр Федераль адреслы инвестиция программаһы буйынса федераль ҡаҙнанан финанслау алғас (Башҡорт дәүләт университетының бюджеттан тыш сығанаҡтарҙан өҫтәмә финанслауы менән), 2011 йылда башланды. "И" корпусын реконструкциялау - Башҡорт дәүләт университетының һуңғы ун йылдағы иң эре инфраструктура проекты. Һуңғы ҙур төҙөлөш эшен юғары уҡыу йорто 1972 йылда алып бара, ул саҡта физика-математика корпусы төҙөлә. Әгәр физика-математика корпусының дөйөм майҙаны 15 мең квадрат метр самаһы тәшкил итһә, заманса "К" һәм "И" корпустарының майҙаны ике тапҡырға тиерлек ҙурыраҡ.

## АВТОБУСТАР ЯҢЫРТЫЛА

**Башҡортостанда мәктәп автобустарына ихтыяж юғары кимәлдә ҡала. Әлеге ваҡытта республиканың Мәғариф министрлығында мәктәп автобустарына муниципалитеттарҙан 143 ғариза ҡабул ителгән.**

"Яҡын ай дауамында федераль ҡаҙна иҫәбенә тағы 77 мәктәп автобусы алаҫаҡбыҙ, улар газ-мотор яғыулығында буласаҡ, - тип һөйләне мәғариф министры Гөлназ Шафиҡова Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышының Мәғариф, мәҙәниәт, спорт һәм йәштәр сәйәсәте буйынса комитет ултырышында. - Автобус һатып алыуға киләһе йылдарға шулай уҡ 100 миллион һум күләмендә төбәк аҡсаһы һалынған. Ул саҡта юл картаһы буйынса автобустар менән тәьмин ителеш 43 процентҡа ҡапланасаҡ". Бөгөнгә төбәктә мәктәп автобустары паркында 1348 берәмек техника иҫәпләнә, уларҙың 325-е һуңғы өс йылда һатып алынған. 2016 йылдың июнендә республика бюджеты иҫәбенә 77 мәктәп автобусы, Рәсәй Федерацияһы бойороғо буйынса 58 берәмек техника алынды. 2016 йылдың ноябрендә федераль ҡаҙна иҫәбенә 50 автобус һатып алынды. Улар уҡыусыларҙы көн һайын мәктәпкә хәтлем илтеү өлөшөн 97,6 процентҡаса тәьмин итергә мөмкинлек бирҙе. 2016-2017 уҡыу йылында 2501 тораҡтан 872 белем биреү ойошмаһына 30 меңдән ашыу уҡыусыны йөрөтөү ойошторолған.

## ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Экзема

❖ Май айында ҡарама ағасы орлоғонда барлыҡҡа килгән шыйыҡсаны һөртөргә. Ялан сәскәләренән яһалған төнәтмә менән йышыраҡ ҡойонорға.

❖ Тигеҙ күләмдә үҫемлек майы менән һеркә алырға, экземалы урындарға һөртөргә.

### Иммунитет нығытыу

❖ Хроник арыуҙан, хәлһеҙлектән арыныу, иммунитетты нығытыу өсөн 5 ҡалаҡ ҡарағай энәләре, 2-шәр ҡалаҡ гөлйемеш менән һуған ҡабығына 1 литр һыу ҡойорға, ҡайнау хәленә еткерергә, 10 минут талғын утта ҡайнатырға, йылы итеп урап 7 сәғәт төнәтергә, һөҙөргә һәм көпме теләйһең, шул күләмдә эсергә.

### Бәшмәк

❖ Ҡул тырнағындағы бәшмәкте дауалау өсөн ҡаты итеп ҡәһүә бешерергә, уға ҡулдарҙы тығып ултырырға. Тик төбөндәге ҡуйырыкты болғатмаҫҡа. Был ысул аяҡ тырнағы бәшмәген дә дауалай, шулай уҡ үксә ярылғанда ла яҡшы дауа. Бер нисә көн йоҡлар алдынан ҡабатларға.

❖ Шарап һеркәһенә аяҡтарҙы тығып ултырырға ла, аяҡтарҙы ҡоротмай ғына ойоҡ кейеп йоҡларға.

### Бронхит

❖ 1 ҡалаҡ ҡарағай энәһенә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 10 минут ҡайнатырға, һөҙөргә һәм 1 балғалаҡ бал өҫтәп, көн дауамында йотомлап эсергә.

### Витамин етмәгәндә

❖ 1 ҡалаҡ ҡарағай энәһенә 1 литр ҡайнар һыу ҡойорға, 15 минут төнәтергә һәм сәй итеп эсергә.

### Һалҡын тейгәндә

❖ Шыршы йәки ҡарағай энәләрен ботаҡтарынан айырып, ит турағыс аша үткәрергә, һәр 100 грамм массаға 1-2 ҡалаҡ бал өҫтәргә, ингаляция һәм түшкә компресс өсөн ҡулланырға. Һыуыктыстың аҡсы кәштәһендә һаҡларға.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

***✓ Милләтебеҙ ҡаһарманы, рухи юлбашсыбыҙ, данлыҡлы ишан Зәйнулла Хәбибулла улы әл-Нәҡшбәндиәнең тарихи сәғәттәре һуҡты. Кешелек тарихында мең йылға бер тыуыр олуғ милләттәшебеҙҙең рухи урамына мөбәрәк байрам килде.***

*ЙОЛАЛАРЫБЫҘ*



# БАШҠОРТ КЕЙЕМЕ

Үҙәк комплексына мең, табын, юрматы, ҡатай, көҙәй, ҡара-барын-табын һәм ҡыуаҡан ырыуҙары инә. Хәҙерге административ бүленеш буйынса ул үҙенә Архангел, Ғафури районҙарын, Иглин, Өфө, Белорет, Ҡырмыҫҡалы районҙарының бер өлөшөн һәм Силәбе өлкәһенең бәләкәй бер өлөшөн ала.







Был комплекс костюмында көньяҡ-көнсығыш матди мәҙәниәте сағылыш таба. Ҡатын-ҡыҙ күлдәктәре билле, тар балитәкле **(һүрәт)**. Елән төҙөлөшө буйынса көньяҡ-көнсығыш башҡорттарының өҫ кейеменә оҡшаш **(һүрәт)**. Еңһеҙ кейемдәрҙең нигеҙе традицион, аҫҡа ҡарай киңәйә, муйыны V-образлы рәүештә йәки ҙур булмаған ултырма яғалы **(һүрәт)**.

Был төбәктә ҡыш оҙон, 5,5 ай ҡар ята. Урындағы халыҡ башлыса ярым күсмә тормош алып барған, мал көткән, һунар иткән, солоҡсолоҡ менән шөғөлләнгән.

Өҫ кейемдәрен биҙәү өсөн биҙәктәр төрлөсә ҡулланылған. Башлыса елән һәм камзулдар биҙәлгән. Еләнгә уҡа, тәңкә теккәндәр. Камзулдар төрлө төҫтәге фабрика туҡымаһынан тегелгән: бәрхәт, кизе-мамыҡ туҡымалар. Уҡа һәм тәңкә менән биҙәлгән. Тимер тәңкәләр кейемдең аҫҡы өлөшөнә баҫылған.

Тәбиғәт матурлығы еләндең итәген биҙәүҙә сағыла. Был төбәктә шулай уҡ Урал тауҙарын символлаштырған биҙәктәр ҡулланыла.

Баш кейеме таҫтар, француз яулыҡтары, шәл һәм ҡашмауҙан тора. Был төбәктә бүрек аҫтынан таҫтар кейгәндәр. Таҫтар баш кейемен бысраныуҙан да һаҡлаған, биттең аҫҡы өлөшө лә өшөмәгән.

Аяҡ кейемдәре Урал аръяғы халҡында киң таралған сарыҡтарға оҡшаш. Тик үҙәк башҡорттарында уның табаны ҡаты булған һәм бәләкәй генә үксәһе лә бар. Был тәбиғәт үҙенсәлектәре менән бәйле булыуы ихтимал, был яҡта яуым-төшөм күберәк. Ҡаталар төрлө төҫтәге буйҙар йәки буҫтауҙан төрлө геометрик фигуралар менән биҙәлгән **(һүрәт)**.





Шулай итеп, үҙәк башҡорттар костюмы үҙендә көньяҡ-көнсығыш һәм Урал аръяғы матди мәҙәниәте элементтарын берләштергән. Шәлде һәм яулыҡтарҙы көньяҡ-көнсығыш башҡорттары кеүек, аҫҡа төшөрөп ябынғандар. Әммә камзулдар билле булыуы сәбәпле, был төбәк костюмдары күпкә еңелерәк һәм нескәрәк тойола.

**Айгөл КАМАЛИЕВА.**
**"Башҡорт костюмы" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

*КҮҢЕЛ МӨҺӨРӨ*

# "ЙӘШЕРЕН ХАЗИНА"НЫҢ ЕРҘӘГЕ БИҘӘГЕ...

## Зәйнулла Рәсүлев тураһында бер кәлимә

**Башҡортостан Республикаһының 100 йыллыҡ юбилейын байрам итергә әҙерлек старт алған ағымдағы йылдың башҡорт халҡының рухи батшаһы, мәшһүр дин белгесе, философ, мәғрифәтсе-мөғәллим шәйех Зәйнулла ишан Рәсүлевтың баҡыйлыҡҡа күсеүенә 100 йыл тулыуын билдәләү менән башланып китеүе, йәғни быуатлыҡ ваҡиғаларҙың тап килеүе осраҡлы ғына күренеш түгел. Башҡортостан Диниә назараты ойошторолоуға ла быйыл 100 йыл тула...**



### Сәбәпһеҙ япраҡ та һелкенмәй…

Һүҙ юҡ, быуатлыҡ ваҡиғалар юҡҡа ғына бөгөн килеп бергә осрашмайҙыр инде. Уларҙың икеһенең, йәғни Башҡортостан Республикаһы менән Диниә назаратының ни өсөн бер үк йылда барлыҡҡа килеүе аңлашыла: фәҡәт автономиялы үҙаллы республика төҙөгәндән һуң ғына уның дини идаралығын төҙөү мөмкин була. Ә инде Зәйнулла Рәсүлевтың баҡыйлыҡҡа күскән 1917 йылдың 2 февраль көнөнә килгәндә инде, Мәүләнә әүлиә шәйех Солтан Мехмет был хәлгә шундай аңлатма бирә: "Дәһрилеккә юл асылған оло фетнә алдынан Аллаһы Тәғәлә һөйөклө заттарының барыһын да үҙенең янына алды, иң һуңынан Зәйнулла ишан Рәсүлевты баҡыйлыҡҡа күсерҙе..."

Ысынлап та, Зәйнулла ишан Рәсүлев вафатынан һуң бер ай үтеүгә, Рәсәй батшаһы Николай Икенсе үҙ тәхетенән баш тарта, 1917 йылдың 2 (15) мартында Дәүләт Думаһы вәкилдәре Александр Гучков менән Василий Шульгинға тәхеттән баш тартыуы тураһында манифест тапшыра. Шул ваҡиғанан алып Рәсәйҙә, һуңынан Советтар Союзында 70 йылдан ашыу ваҡытҡа һуҙылған дәһрилек дәүере башлана.

Эйе, Хаҡ Тәғәләнең ихтыярынан тыш, сәбәпһеҙгә япраҡ та һелкенмәй, ҡош та осмай. Өс ваҡиғаның, өс хәлкүренештең тап килеү миҫалын тарихта һәм хәҙерге заманда тағы ла бик күп килтерергә мөмкин булыр ине. Шуларҙың береһен генә әйтеп үтеү ҙә етәлер. Башҡортостан Республикаһының 100 йыллығы уңайынан ойошторолған 100 арҙаҡлы шәхесте билдәләү сараһында ла Әхмәтзәки Вәлиди, Зәйнулла Рәсүлев, Рәми Ғариповтың иң башта һәм йәнәш тороуы ла шулай уҡ осраҡлы түгел. Был - милли рухыбыҙҙың, милли инаныуыбыҙҙың диндәге иман кеүек ныҡлы булыуын күрһәтә. Интернет аша тауыш биреүҙең был сараһы тағы ла бер тапҡыр халыҡ хәтеренең хәҡиҡәткә тоғролоғон, үҙенең азатлығы өсөн йәнен аямағандарға, фиҙа булғандарға һис ҡасан да һүрелмәҫ мөхәббәтен раҫланы. Ҡалғандары - ваҡытлыса ғына.

Быйыл шәйехтең баҡыйлыҡҡа күсеүенә 100 йыл тулыу айҡанлы баш ҡалабыҙ Өфөлә "Шәйех Зәйнулла Рәсүлев - күренекле башҡорт фәйләсүфе, мосолман донъяһының дин белгесе һәм мәғрифәтсеһе" тигән темаға фекер алышыу ҡоро ойошторолдо. Артабан саралар Учалы һәм Троицк ҡалаларындағы шәйех исемен йөрөткән мәсеттәрҙә ғилми-ғәмәли конференция, хәтер һәм ҡәҙер кисәһе рәүешендә дауам итте. Ҡасандыр Зәйнулла ишан "Рәсүлиә" мәҙрәсәһенә төрлө халыҡтар вәкилдәренән торған шәкерттәрҙе йыйып һабаҡ бирһә, уның баҡыйлыҡҡа күсеүенең 100 йыллығын үткәреү өсөн башҡорт, ҡаҙаҡ, татар, ҡырғыҙ, урыҫ, үзбәк, Кавказ халыҡтары вәкилдәре үҙҙәре йыйылды. Ошо миҫалға ғына ҡарап та Зәйнулла ишан Рәсүлев эшмәкәрлегенең тарихи әһәмиәтен билдәләргә була. Милләттәшебеҙ Зәйнулла ишан донъя кимәлендәге әһәмиәткә эйә, тиңдәше булмаған шәхес. Йыйында рҙа Зәйнулла, Ғабдулла, Ғаталла ишандар, Мөжәүир хәҙрәт һәм башҡалар рухына бағышлап аяттар уҡылды, зекерҙәр әйтелде.

### Бәрәкәте Башҡортостанда ҡалды

1974 йылға тиклем Башҡортостан Диниә назараты рәйесе булып торған Шакир Хыялетдинов үҙенең Троицкиҙа Зәйнулла шәйехтә уҡыған йылдары тураһында мәғлүмәт килтереп, остазының 1909 йылда киләсәк замандарҙы күҙаллап әйткән һүҙҙәрен иҫкә ала. Батша Рәсәйендә мосолмандарҙың, шул иҫәптән башҡорттарҙың, ғәҙелһеҙлектәргә дусар ителеүенә Зәйнулла ишан Рәсүлев мөнәсәбәтен шулай белдергән: "Инанған динебеҙ кеүек үк, халҡыбыҙҙың түҙемлеге икһеҙ-сикһеҙ. Әммә Аллаһы Тәғәлә ғәҙелдәрҙең-ғәҙеле, һәм ул беҙ күргән яфалар өсөн үҙенең сауабын ҡайтарырға теләр. Мин ул көндәргә тиклем йәшәй алмам, әммә һин, Шакир, хәҡиҡәт нурын һис бер кем дә ҡаплай алмаҫ ваҡытты күрәсәкһең..."

"...Хәҡиҡәт нурын һис бер кем дә ҡаплай алмаҫ ваҡытты күрәсәкһең" тигән үҙенең шәкертенә Зәйнулла ишан. Тик шәйех ҡайһы заманды күҙ уңында тотто икән? 1917 йылғы Октябрь инҡилабынан һуң башҡорт халҡының автономия яулау осоронмо? Әллә Сталиндың шәхес культын фашлау йылдарынмы? Әллә элекке Советтар Союзында йәшәүсе халыҡтарҙың тәрән йоҡоһонан уянған 80-се йылдарҙың аҙағы, 90-сы йылдарҙың башынмы? Әллә өсөнсө меңйыллыҡтың, XXI быуаттың башынмы, йәғни ошо көндәрҙеме?

Әйткәндәй, алдағы йылдың 25 мартында Зәйнулла ишан Рәсүлевтың тыуыуына 185 йыл тулыуын да иҫкә төшөрһәк, республикабыҙ байрамына әҙерлек барған ваҡытта шәйехтең тағы ла бер хәтер ҡорон үткәреү бурысы беҙҙең алға килеп баҫа. Гүйә Хаҡ Тәғәлә беҙҙе берҙәмлеккә, уяулыҡҡа саҡырып, тарихи ваҡиғаларҙы бер тирәгә ойошторған. Зәйнулла исеменә бәйләп сәбәп ҡылған, мәжлесенә йыйған. Бер сара ойошторап, таралып та өлгөрмәйбеҙ, икенсеһенә йыйылырға, бының өсөн аныҡ ғәмәлдәр башҡарырға тотонабыҙ. Иншалла!

Ҡасандыр, бынан ике тиҫтә йылдар элек беҙ был хаҡта хыяллана ғына ала инек. 2008 йылда Зәйнулла ишан Рәсүлевтың тыуыуына 175 йыл тулыуы киң билдәләп үтелде. Милләтебеҙ ҡаһарманы, рухи юлбашсыбыҙ, данлыҡлы ишан Зәйнулла Хәбибулла улы әл-Нәҡшбәндиәнең тарихи сәғәттәре һуҡты. Башҡорт һәм мосолман донъяһында ғына түгел, ғөмүмән, кешелек тарихында мең йылға бер тыуыр олуғ милләттәшебеҙҙең рухи урамына мөбәрәк байрам килде. Беҙ Зәйнулла ишан Рәсүлевтың исеме бар донъяға яңғырар мәҙҙәтте хәҡиҡәткә ышанғандай, иманыбыҙға табынғандай көттөк. Ҡасандыр атаҡлы ишандың Шакир атлы шәкертенә әйткән һүҙҙәренең хаҡлығын тап шул йыйындарҙа таныныҡ та инде. Был датаға арналған сараларҙың әһәмиәтен билдәләр өсөн "Зәйнулла Рәсүлев - атаҡлы башҡорт фекер эйәһе, дин эшмәкәре һәм мосолман донъяһының танылған мәғрифәтсеһе" тигән халыҡ-ара ғилми-ғәмәли конференцияһында эшләгән секцияларҙың исемдәрен генә атап үтеү ҙә күпте һөйләр, олуғ шәхесебеҙҙең даирә киңлегенә ишаралар:

- Зәйнулла Рәсүлев һәм фәлсәфәүи фекер, Ислам донъяһында мәҙәни-рухи бәйләнештәр һәм традициялар;

- Зәйнулла Рәсүлев - мәшһүр башҡорт педагог-мәғрифәтсеһе һәм мосолман донъяһының рухи остазы;

- Архив сығанаҡтарында, ҡулъяҙма китаптарҙа, ваҡытлы матбуғатта һәм хәтирәләрҙә Зәйнулла Рәсүлевтың тормошо һәм эшмәкәрлеге сағылышы;

- Зәйнулла Рәсүлев һәм XIX-XX быуат башында Башҡортостанда ижтимағи сәйәси фекер.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**
**(Дауамы бар).**

✔ *Артабанғы айҙарҙа ул милли хәрәкәттең уртаһында ҡайнай. 1917 йылдың 15 ноябрендә Башҡортостан автономияһын иғлан иткән тарихи акт - Башҡорт үҙәк шураһының 2-се һанлы фарманын әҙерләүҙә һәм уны иғлан итеүҙә ҡатнаша.*



УЛАР АВТОНОМИЯ ЯУЛАНЫ



**Илдархан Мутин Минзәлә ҡалаһында 4 синыфлы училище тамамлай. 1909 йылда хәрби хеҙмәткә алынып, биш йыл буйы 12-се сик буйы бригадаһында хеҙмәт итә. Хәрби хеҙмәттән ҡайтҡас, мөғәллимлек итә, таможня ведомствоһында, артабан кооперация инструкторы булып эшләй. 1917 йылда И. Мутин Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтенә ҡушылып китә. Тиҙҙән ул милли хәрәкәт лидерҙарының береһенә әүерелә. 1917 йылдың 20-27 июлендә Ырымбурҙа үткән тәүге Башҡорт ҡоролтайында, Шәриф Манатов, Зәки Вәлидиҙәр менән бергә милли хәрәкәттең идара органы - Башҡорт үҙәк шураһының башҡарма комитетына һайлана. Әйткәндәй, ошо осорҙа Илдархандың туғаны Ғариф Мутин да Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтендә ҡатнаша. Ул да Башҡорт үҙәк шураһының башҡарма комитеты составына индерелә.**

# ИЛДАРХАН МУТИН -

## Минзәлә башҡорттарынан сыҡҡан милли хәрәкәт эшмәкәре

Ҡоролтай ҡушыуы буйынса, 1917 йылдың августында Илдархан Мутин Зәки Вәлиди һәм Усман Ҡыуатовтар менән бергә Петроградҡа барып, Ваҡытлы хөкүмәттең ауыл хужалығы министрлығында булып, башҡорт халҡының ер мәсьәләһе һәм Каруанһарайҙы ҡайтарыу буйынса һөйләшеүҙәрҙә ҡатнаша. "Беҙ ауыл хужалығы министры Чернов менән һөйләштек... Эш хаҡында һөйләшеүһе урынға үҙ тәғлимәтенең нигеҙҙәрен аңлатырға кереште. Шулай ҙа Каруанһарай мәсьәләһендә беҙҙең файҙаға бер әмер бирҙе", - тип яҙа Зәки Вәлиди үҙенең хәтирәләрендә.

Петроградтан ҡайтҡас, Илдархан Мутин Башҡорт үҙәк шураһының хәрби эштәр буйынса бүлеген етәкләй. Артабанғы айҙарҙа ул милли хәрәкәттең уртаһында ҡайнай. 1917 йылдың 15 ноябрендә Башҡортостан автономияһын иғлан иткән тарихи акт - Башҡорт үҙәк шураһының 2-се һанлы фарманын әҙерләүҙә һәм уны иғлан итеүҙә ҡатнаша.

1917 йылдың 8-20 декабрендә үткән III Дөйөм Башҡорт ойошторойо ҡоролтайында Илдархан Мутин Башҡортостан автономияһының Кесе ҡоролтайы (предпарламент) һәм Башҡорт хөкүмәтенең ағзаһы итеп һайлана. Мутин хөкүмәттең ҡаҙнасыһы (финанс бүлеге мөдире) вазифаһын үтәй. 1918 йылдың ғинуарында Ырымбур ҡалаһы большевиктар ҡулына күсә. Ошонан файҙаланып, Башҡортостан автономияһына ҡаршы булған Ырымбур мосолман хәрби комитеты Башҡорт хөкүмәте ағзаларын контрреволюцияла ғәйепләп, 4 февраль (яңыса 16 февраль) көнө төрмәгә ябып ҡуя. Илдархан Мутин З. Вәлиди, С. Мерәсов, Ғ. Айытбаев, А. Йәғәфәровтар менән ике ай тирәһе Ырымбур төрмәһендә ултыра.

Башҡорт хөкүмәтен 1918 йылдың апрель башында Әмир Ҡарамышевтың отряды казактар ярҙамында төрмәнән азат итә. Башҡорт эшмәкәрҙәре, шул иҫәптән И. Мутин да ике ай тирәһе советтарҙан йәшеренеп йәшәй. 1918 йылдың май аҙағында Силәбе ҡалаһында Чехословак корпусы большевиктарҙы ҡыуып, үҙ власын урынлаштырғас, хөкүмәт ағзалары шунда йыйыла башлай.

1918 йылдың июнь башында Башҡорт хөкүмәте яңынан үҙ эшмәкәрлеген йәйелдереп ебәрә. Милли хәрәкәт етәкселәре тәү сиратта автономияның хәрби көстәрен булдырыу эшенә тотона. Ғәскәрҙәр менән идаралыҡ итеү органы - Башҡорт хәрби шураһы ойошторола. Июль айынан Илдархан Мутин хәрби шураның рәйесе Зәки Вәлидиҙең урынбаҫары булып хеҙмәт итә. Август-сентябрь айҙарында Вәлиди дәүләт мәсьәләләре менән Һамар ҡалаһында, Өфөлә Дәүләт кәңәшмәһендә йөрөгән саҡта, Илдархан Мутин Башҡорт хәрби шураһы рәйесе бурыстарын үҙ өҫтөнә ала. Артабанғы айҙарҙа Башҡорт хөкүмәтенең финанс бүлегенә етәкселек итә.

Башҡорт хөкүмәте һәм ғәскәрҙәре Совет власы яғына сыҡҡандан һуң, 1919 йылдың 1 мартынан 15 апреленә тиклем, Башҡортостандың Эске эштәр халыҡ комиссары вазифаһын башҡара. 15 апрелдән республиканың Социаль тәьминәт комиссариатын етәкләй. Башҡортостандың революцион хөкүмәте - Башревком ағзаһы итеп һайлана.

1919 йылдың майында Башҡортостан автономияһының Туҡ-Соран кантоны аҡтарҙан азат ителеү менән Илдархан Мутин Саранскиҙан Башревкомдың Уполномоченныйҙар Советы ағзаһы сифатында республикаға ҡайтып төшә. Бында Туҡ-Соран кантоны халҡын башҡорт ғәскәрҙәренә мобилизациялау, кантон ревкомын, улыс советтарын ойоштороу менән мәшғүл була.

1919 йылдың 28 сентябрендә Илдархан Мутин Башҡортостандың Аҙыҡ-түлек халыҡ комиссары урынбаҫары итеп тәғәйенләнә. 1919 йылдың ноябренән 1920 йылдың февраль айына тиклем ВЦИК-тың "Башкирпомощь" комиссияһы уполномоченныйы урынбаҫары сифатында Башҡортостандың Тамьян-Ҡатай, Бөрйән-Түңгәүер кантондарында эшләй. Һуғыш арҡаһында тамам бөлгән халыҡты аслыҡтан ҡотҡарыу эше менән янып йөрөй.

1920 йылдың майында Үҙәк Совет хөкүмәте Башҡортостандың автономия хоҡуҡтарын ҡырҡа ҡыҫҡарта. Бер һүҙ менән әйткәндә, башҡорттарҙың ике йыл буйы күпме ыҙа сигеп, күпме ҡан түгеп яулаған автономияһынан исеме генә тороп ҡала. Бының менән риза булмаған Башревком ағзалары, шул иҫәптән И. Мутин, 1920 йылдың июнендә Зәки Вәлиди кәңәше буйынса Башҡортостанды ташлап, Төркөстанға сығып китә. Бында ул Нуриәғзәм Таһиров менән бергә Бохара республикаһының Кермина округы мәғариф бүлегендә эшләй.

Төркөстандағы советтарға ҡаршы милли хәрәкәт уңышһыҙлыҡҡа осрағас, 1921 йылдың июнендә Н. Таһиров менән Башҡортостанға ҡайта. 1921 йылдың августынан Илдархан Мутин Башцентросоюз идараһы рәйесе булып эшләй. 1922 йылдың февраленә Башцентросоюз һәм Башсовнархоздың уполномоченныйы сифатында Мәскәү ҡалаһына эшкә ебәрелә. 1923 йылдың сентябрендә Башҡортостанға ҡайтып, республиканың Инвалидтар кооперацияһы идараһы, 1924 йылдан Башсоюз идараһында эшләй. 1926-1928 йылдарҙа Мәскәүҙә Башҡортостандың сауҙа вәкиллеге мөдиренең урынбаҫары вазифаһын башҡара.

30-сы йылдар аҙағындағы башҡорттоң күп кенә аҫыл ир-азаматтарын һәләк иткән Сталин репрессияһы тәғәрмәсе Илдархан Ибраһим улы Мутинды ла аямай. Ул СССР Юғары Советының хәрби коллегияһы ҡарары менән 1938 йылдың 2 февралендә атыла.

Былтыр Илдархан Мутиндың тыуған ауылы Таҡталасыҡта уның исемен мәңгеләштереү маҡсатында Башҡортостандан иҫтәлекле таҡтаташ ҡуйылды.

**Азат ЯРМУЛЛИН,**
**тарихсы.**
**(Аҙағы. Башы 11-се һанда).**

*ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ*

## ӘЛМИСАҠТАН...



➔ 1758-1762 йылдар - Афанасий Романович Давыдов губернаторлыҡ иткән йылдар. 1760 йылда, ҡул аҫтындағылар менән шулай тейеш, тип иҫәпләгән командирҙар тарафынан казактар менән станица атамандарын язалауға ҡаршы сыға.

➔ 1759 йылдың 28 ноябре - Өсөнсө ревизия хаҡында указ баҫылып сыға, унда ҡатын-ҡыҙҙарҙы ла иҫәпкә алыу ҡаралған була.

➔ 1761 йыл - Шайтан-Көҙәй башҡорттары ерендә И. Твердышев менән И. Мясниковтың Сим заводы төҙәлә. Ете йыллыҡ һуғыштан ҡайтҡан Юлай Аҙналин ерҙәрҙе суд аша ҡайтарырға тырышып ҡарай. Крәҫтиәндәр һуғышында Салауат заводтарҙы үртәй. Восстаниенан һуң улар яңыртып төҙәлә.

➔ 1761-1866 йылдар - Н.Осокиндың Өсән-Иванов заводы эшләгән йылдар.

➔ 1761 йыл - Ырымбурҙа тәүге халыҡ иҫәбен алыу үткәрелә.

➔ 1762-1763 йылдар - Дмитрий Васильевич Волков губернаторлыҡ иткән йылдар. Д.В.Волков Рәсәйҙең Һиндостан һәм Урта Азия менән сауҙа итеүенә ҙур иғтибар биргән. 1764 йылда ул мануфактур-коллегия президенты итеп тәғәйенләнә. Ҡаҙаҡ ханы Нурали уның Ырымбурҙан китеүе менән ҡәнәғәтһеҙлеген белдереп, императрицаға Волковтың унан алдағы Неплюев һәм Тевкелев кеүек үк "ҡырғыҙ-ҡайсаҡ мәсьәләләре буйынса идара итеүгә һәләтле" булыуы хаҡында яҙа.

**Дәүләт МӘҺӘҘИЕВ төҙөгән.**
**(Дауамы бар).**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Йәдкәр БӘШИРОВ*

# БӨЙӨК БАШҠОРТ ИЛЕ

### ХАНЛЫҠТАР

### 4. Ишем ханлығы

Ишем ханлығы тарихы тулыһынса өйрәнелмәгән. VIII-XII быуаттарҙа башҡорттарҙың бер төркөмө Урал тауҙары һәм Иртыш арауығының төньяғындараҡ, Обь йылғаһы бассейнында урынлашып, Ишем ханлығы тип шартлы рәүештә аталған ырыуҙар союзы барлыҡҡа килә. Ишем ханлығы булыуы һәм унда башҡорт ырыуҙарының йәшәүе Иртыштың һул яҡ яры Мөйтән бейҙең олоҫона инеүе менән аңлатыла. Мөйтән бейгә был ерҙе Сыңғыҙхан "мәңгелеккә" беркетә (тимәк ханлыҡ "шартлы" түгел), һәм был мәғлүмәт беҙгә тарихи Башҡортостандың сиктәрен билдәләргә мөмкинлек бирә.

### IV бүлек

Был ҙур территорияла башҡорт ҡәбиләләренең көн итеүе, башҡорт халҡының бик боронғо булыуы хаҡында боронғо тарихи сығанаҡтар һөйләй. Б.э.т. Уралда Аслан батшаның улы Бөрйәндең үҙенең "бөрйән" тип аталған көслө урҙаһы менән йәшәүе билдәле. Б.э.т. VII быуатта данлыҡлы Буртас Сармат батша ассирий батшаһы Шумер Ассархадондың (б.э.т. 680-669 й.й.) ҡыҙына өйләнә. Ул саҡ төркөмөнә ҡараған Ҡаҙағстандың көньяғы өсөн талашҡан ике төркөмдөң - ҡыпсаҡтар менән мәсәгүттәр араһында барған ыҙғышҡа ҡушыла. Ҡыпсаҡтар еңелә һәм улар Буртасҡа үҙҙәрен мәсәгүттәрҙән алыҫыраҡ урынға күсереүен үтенә. Буртас Ҡара дингеҙ буйында йәшәүсе кимерейҙарға ҡыпсаҡтарға үҙ ерҙәренең яртыһын биреүҙәрен һорай. Тегеләр баш тартҡас, Буртастың улы Маджи кимерейҙарҙы тулыһынса ҡыйрата. Буртастың ҡайныһы Ассархадон Уралда йәшәүсе кейәүенә элек тә яҡын көнсығыштағы афразийҙарҙың ерҙәрен яулашырға ярҙам итеүен һораған булған. Буртас ҡайныһын "үҙ шумеры " итеп күргән, шуға күрә ул Маджи улын ғәскәр менән ярҙамға ебәргән. Кимерейҙарҙы ҡыйратҡан өсөн Ҡамыр батыр тигән данлыҡлы исем алып өлгөргән Маджи 653 (б.э.т.) йылда мидийҙарҙы ҡыйрата һәм шумерҙар менән ҡушыла.

Тәурат (Библия) Маджи ғәскәре баҫып алғандан һуң Афразия халҡы ниндәй тетрәнеү кисергәнен шулай һүрәтләй: "Бына төньяҡ илдән халыҡ килә... ҡулдарында уҡ-һаҙағы һәм ҡыҫҡа һөңгөләре, улар аяуһыҙ, бер кемде лә йәлләп тормайҙар! Улар диңгеҙҙәй ажғыра, аттарҙа сабалар, бер кеше кеүек рәткә теҙеләләр... Улар хаҡында ишетеү менән ҡулдарыбыҙ һәленеп төшә, беҙҙе болот һәм ҡайғы баҫа... дошман ҡылысы һәр яҡтан да үлем менән янай" (улар Урал тауҙарында йәшәүсе башҡорттарҙың боронғо ата-бабалары - **Й.Б.**). Египет фирғәүене Маджиға һалым түләп саҡ ҡотола. Улар 28 йыл буйына Яҡын Көнсығышта хакимлыҡ итә. Һуңынан скифтар башлығы Мидиҙың ғәмһеҙлеге һөҙөмтәһендә 625 йылда ғәскәрҙәренең төп көсө ҡыйратыла, һәм Маджи үҙенең ғәскәрен кире Волга-Урал Иҙеленә йүнәлтә. Ҡайтҡас, Маджи Иҙел буйындағы ерҙәрен өс өлкәгә бүлә: Волга менән Ағиҙел арауығы, Волганың һул яры һәм түбәнге ағымы, Волга менән Яйыҡ арауығы. Ағиҙел буйына хондарҙың беренсе хакимы Ҡама батыр килә һәм Биләр дәүләтен ойоштора, халыҡтың ҙур өлөшө уны хан итеп таный. Ә инде Бесер бей хан булған заманда илдә йәшәүселәрҙе бесермәндәр тип атағандар. Улар хон (башҡорт) теләндә һөйләшкән. Власҡа Бүлемәр килгәс, илдә йәшәүселәр бүләрҙәр тип аталған".

**(Дауамы бар).**

*✓ Беҙ башҡорт сәнғәте донъяһындағы билдәле кешеләр - Нариман Сабитов, Гүзәл Сөләймәнова, Зәйтүнә Насретдинова, Майя Таһирова, Ғата Сөләймәнов, Мөхәммәт Иҙрисов, Тамара Нечаева һ.б. менән бер йортта йәшәнек.*



**Телефондан һөйләшеү манераһынан уҡ унының затлы тоҡомдан икәнен самаларға мөмкин ине. Ә инде үҙе менән осрашҡас, бөйөклөктөң ябайлыҡта икәнлегенә тағы бер ҡат инанылды. Тамырҙары менән Бикбау кенәзгә барып тоташыусы башҡорт дворяндары Ҡыуатовтар нәҫеленән булған балет артисы, Башҡортостандың халыҡ артисы, РСФСР-ҙың халыҡ артисы кеүек юғары исемдәр йөрөтөүенә ҡарамаҫтан, ябай, ихлас әңгәмәсе генә түгел, һаман да нәзәкәтле, хис-тойғоло ҡатын-ҡыҙ булып ҡала белгән гүзәл ханым, Р. Нуриев исемендәге Башҡорт хореография колледжының художество етәксеһе һәм Башҡорт дәүләт опера һәм балет театрының балетмейстеры Леонора Сафый ҡыҙы ҠЫУАТОВА бөгөн "Өфө башҡорто" рубрикаһының сираттағы ҡунағы.**

# ИҢ ЯҠШЫ МӘЛДӘРЕМ...

## тотош тормошом баш ҡала менән бәйле

**Үҙегеҙҙең данлы дворян нәҫеленән икәнегеҙҙе белеп үҫтегеҙме?**

- Был хаҡта асыҡтан-асыҡ үҙгәртеп ҡороу йылдарында ғына һөйләй башланылар бит. Ағайым Дамир Мөҙәрис улы Ҡыуатов, белеме буйынса тарихсы, был йәһәттән аҙмы-күпме мәғлүмәт бирә ине. Элек бит ундай мәғлүмәттәргә ихтыяж да булманы. Ә инде шәжәрәбеҙҙе барлай башлаһаҡ, унда республикала билдәле шәхестәр бихисап. Шулай ҙа нәҫел-нәсәбемдең башлыса табиптарҙан тороуына Башҡортостандың һаулыҡ һаҡлау эшенә нигеҙ һалыусыларҙың береһе беҙҙең заттан булыуы ла йоғонто яһағандыр, тим. Бөгөн республикала иң ҙур клиник дауахананың Ҡыуатов исемен йөрөтөүе лә быға дәлил. Әсәйем - Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашыусы Йәмилә Абдулла ҡыҙы Кәлимуллина ла, минең бер туған ағайҙарым, еңгәләрем дә табип. Атайым иһә Ейәнсура районында тыуып, һуңынан балалар йортонда тәрбиәләнеп, педагогия институтын тамамлай. Белемгә ынтылышы ҙур була унының, китаптарҙы һыу кеүек "эсә". Ә инде 1939 йылда Манчьжурияға командировкаға ебәрелгәс, унда ҡытай һәм инглиз телдәрен өйрәнеп, тәржемәсе булып йөрөй. Башҡортостанда атайым Сафый Солтанморат улы Ҡыуатовты журналист, РСФСР-ҙың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, матбуғат алдынғыһы, Журналистар союзы ағзаһы итеп беләләр.

**Ә һеҙҙең тап балет сәнғәтен һайлауығыҙ нисек килеп сыҡты? Башҡорттар өсөн балет сит мәҙәниәт һымағыраҡ бит?**

- Башҡорттар бейеүгә бик һәләтле, улар хәрәкәттәрҙе дөрөҫ итеп бирә белә. Юҡҡа ғына Рудольф Нуриев башҡорт балеты сәнғәтен донъя кимәленә сығармаған. Сөнки сит илдә хис-тойғолар менән бейемәгәндәр, ә беҙҙең бейеүселәр бейеүҙәрҙе хәрәкәт аша ғына түгел, хис-тойғолар аша ла асып бирә.

Уҙған быуаттың 50-се йылдары уртаһында беҙ башҡорт сәнғәте донъяһындағы барлыҡ билдәле кешеләр - Нариман Сабитов, Гүзәл Сөләймәнова, Зәйтүнә Насретдинова, Майя Таһирова, Ғата Сөләймәнов, Мөхәммәт Иҙрисов, Тамара Нечаева һ.б. менән бер йортта, коммуналь фатирҙа йәшәнек. Ул Мәҙәниәт министрлығы ҡарамағында ине, ә атайым ул ваҡытта китап нәшриәте директоры булып эшләне. Цурюпа һәм Октябрь революцияһы урамдары киҫешкән ерҙә урынлашҡан ул бина. Өҫтәүенә, ике туған апайым Венера Ғәлимова Ленинград хореография училищеһында белем ала һәм кемдәр, нисек уҡытыуҙары тураһында иҫе китеп һөйләй торғайны. Башҡортостандың үҙенең балет мәктәбе булмағас, кадрҙар Мәскәүҙә һәм Ленинградта әҙерләнде бит ул саҡта. Тәүге ҡарлуғастар араһында Зәйтүнә Насретдинова - балет буйынса башҡорттарҙан СССР-ҙың беренсе халыҡ артисы (ул ваҡытта был исемде СССР-ҙа дүрт кеше генә йөрөтә) була. Тап унының сығышын күреп, Рудольф Нуриев балет артисы булып китә лә инде. Үкенескә күрә, был тарихты онотабыҙ, ә уны һәр саҡ иҫтә тоторға кәрәк. Юҡһа, Нуриевтың исемен йыш ҡабатлайбыҙ, ә милли ғорурлығыбыҙ булған Зәйтүнә Әғзәм ҡыҙы иҫкә лә алынмай.

Балетҡа элек-электән 10 йәштән ҡабул итәләр һәм был эш дәүләттең даими контролендә тотола торғайны. 9 йыл үтеп, сығарылыш булғас, яңы төркөмдө тағы уҡырға ебәрәләр ине. Беҙ өсөнсө төркөм булдыҡ. Ленин урамындағы хәҙер Һаҡлыҡ банкы урынлашҡан бинала 11-се мәктәп була торғайны, мин шунда белем алдым. Ә Опера һәм балет театры эргәлә генә. Сираттағы төркөмдө йыйырға килгән комиссия, әлбиттә, иң тәүҙә беҙҙең мәктәпкә инде. 3-сө класта уҡыусыларҙың барыһын да теҙеп ҡуйҙылар, уларҙың талаптарына тап килгәнмендер инде - мине һайланылар. Атай-әсәйем барыбыҙҙы ла табиплыҡҡа әҙерләй ине, ә мин, хатта үҙем дә уйламаҫтан, балет мәктәбенә уҡырға киттем. Атайым был хәлгә сабыр ғына күнде, әммә әсәйемдең һис тә мине ситкә ебәргеһе килмәне. Әммә апайым Венера менән Зәйтүнә апай Насретдинова уны күндерҙе. Үҙем дә, барам, тинем дә, фекеремде башҡаса үҙгәртмәнем. 10 йәшлек балала шундай ышаныс ҡайҙан булғандыр инде... Әлбиттә, һағына инем, әммә балет мәктәбе - ул Суворов училищеһы һымаҡ: шул тиклем тәртипкә өйрәнәһең, күңелһеҙләнеп ултырырға ла ваҡытың ҡалмай. Юҡҡа ғына, һәләтһеҙ балалар булмай, бары тик уларҙың һәләтен үҫтерергә кәрәк, тимәйҙәр. Ҡайһы өлкәлә үҫтерәһең - улар шул өлкәлә үҫешә. Мин дә ошо ағымға эләктем һәм яҙмышыма рәхмәтлемен.

**Уҡыуҙы тамамлап, Ленинградтан ҡайтҡас, Өфөләге тәүге сығышығыҙҙы иҫләйһегеҙме?**

- Әлбиттә, уны онотоу мөмкинме һуң! Ленинградта беренсе тапҡыр сәхнәгә сыҡҡанымды иҫләйем әле: ул "Снегурочка" балетында Төлкө партияһы ине. Башҡорт дәүләт опера һәм балет театрында мине шунда уҡ солист итеп ҡабул иттеләр, сөнки ҙур тәжрибәгә эйә инем - Мария театрында төп партиялар башҡара торғайным. Хатта Ленинградта ҡалдырырға хәл дә иткәйнеләр. Республикабыҙҙың ул ваҡыттағы мәҙәниәт министры Клара Төхвәтуллина был хаҡта белеп ҡалып, Ленинградҡа килеп етте, ҡала партия комитетына инеп: "Һеҙ ни өсөн беҙҙең милли кадрҙарҙы үҙегеҙгә ҡалдырырға тейешһегеҙ әле?" - тип, мине алып ҡайтып китте. Әммә Башҡортостанға ҡайтҡаныма бер ваҡытта ла үкенмәнем, сөнки нисәмә йылдар үтһә лә, барыбер атай-әсәйемде, Өфөнө һағына инем.

Иң тәүҙә сәхнәгә Нариман Сабитовтың "Яратам һине, тормош" спектаклендәге Айһылыу партияһы менән сыҡтым. Фирҙәүес Нафиҡова, Майя Таһировалар менән ошо партияны өсәүләп өйрәндек. Бик ауыр булды, сөнки ул классик жанрҙа эшләнһә лә, тотошлайы менән классика түгел ине. Дөрөҫөн әйткәндә, балет артистары бейеп кенә йөрөмәй, улар ҙа сәхнәлә образ тыуҙырырға, уйнарға тейеш. Һәр драма артисы трагик роль уйнарға хыялланһа, балет артистары "Ромео менән Джульетта", "Спартак" һ.б. ролдәрҙе башҡарырға хыяллана. Әммә балет артисы өсөн техник яҡтан да, эмоциональ яҡтан да иң ауыр партия - ул "Аҡҡош күле" балеты, сөнки бер артисҡа ике ҡапма-ҡаршы образды кәүҙәләндерергә тура килә. Юҡҡа ғына уны балериналар өсөн имтихан, тимәйҙәр. "Аҡҡош күле"ндә Одетта-Одилия партияһын башҡарған артист - ул ысын мәғәнәһендә балерина.



**Һеҙ - башҡорт балетын үҫтереүгә ҙур өлөш индергән ғаилә. Бер ҡаҙанға ике тәкә башы һыймай, тиһәләр ҙә, ике сағыу йондоҙ бер ғаиләлә нисек һыйышты икән?**

- Мин - Ленинград, Шамил Тереғолов Пермь балет мәктәбен тамамлап, 1967 йылда Өфөгә, барлығы беҙҙең сығарылыштан ундан ашыу кеше, ҡайттыҡ. Был театр өсөн яңы һулыш, яңы күтәрелеш булды. Шамил менән беҙ "Сыңрау торна" балетында бергә бейенек. Мин - Зәйтүнгөл, ул - кире образ Арыҫланбай ролендә. Сюжет буйынса, Зәйтүнгөл уны яратмай. Әммә Шамил Арыҫланбайҙы шундай итеп башҡарҙы, уға ғашиҡ булмау мөмкин түгел ине. Тормошта ла Шамил шундай һөйкөмлө кеше булды. Ҡыҫҡаһы, оҙаҡламай беҙ унының менән ғаилә ҡорҙоҡ, улыбыҙ тыуҙы - миңә башҡа бер нәмә лә кәрәкмәй ине. Хатта Ленинградҡа

Бәләкәй театрҙа бейергә саҡырыуҙы ла ҡабул итә алмай инем инде.

Элек СССР Мәҙәниәт министрлығы "Рәсәй йондоҙҙары" концерт төркөмдәре менән гастролдәргә сығара ине. Шул төркөм менән Италия, Франция, Германия, Испания, Мексика, АҠШ, Япония сәхнәләрендә Колпакова, Павлова кеүек билдәле бейеүселәр менән бер рәттән сығыш яһаныҡ. Шамил менән бергә Японияға, Төркиәгә барып, осталыҡ дәрестәре үткәрҙек. Кемдең йондоҙо сағыуыраҡ, тиғән уй башҡа ла инмәне, киреһенсә, билдәлелегебеҙ башҡорттарҙы сит илдәрҙә танытырға ярҙам итте.

**▸ Бөгөн Башҡорт опера һәм балет театрында милли спектаклдәр етерлек кимәлдә тип уйлайһығыҙмы?**

- Рус балеты өсөн - "Аҡҡош күле", башҡорт театры өсөн "Сыңрау торна" төп күрһәткес булып тора. "Сыңрау торна" беренсе тапҡыр Мәскәүҙә үткәрелгән Башҡортостан әҙәбиәте һәм сәнғәте көндәренә әҙерләнә һәм шул тиклем уңышлы ҡуйыла, хатта бөгөн дә Нуриев фестиваленә беҙ ошо спектаклде сығарабыҙ. Ул - башҡорт балетының классикаһы. Унан башҡа спектаклдәр ҙә ҡуйылды, ләкин улар ул тиклем уңышлы булманы. Мәҫәлән, Мостай Кәрим трагедияһы буйынса "Ай тотолған төндә" спектаклендә образдар ҙа, музыка ла бай, әммә унда хореография етешмәне. Шуға күрә спектакль яйлап репертуарҙан төшөп ҡалды. Ә әҫәр ни өсөн оҙаҡ йәшәй? Шул уҡ "Аҡҡош күле"н генә алайыҡ - 200 йыл сәхнәнән төшмәй. Сөнки идеаль һәм тотош труппаны формала тота торған спектакль ул. "Спартак" ярты быуат йәшәй. Сценография, хореография - барыһы бергә сәпкә тейә икән, спектаклдәр йәшәй. Заманса спектаклдәрҙән уңышлыларҙан тип шулай уҡ "Арҡайым" балетын миҫал итеп килтерер инем. Мин бейей башлаған осорҙа "Айгөл иле" сәхнәгә сығарылғайны. Йәғни, милли балет өлгөләре булды, тип әйтмәксемен. Ләкин милли балет - ул һирәк күренеш, сөнки ул бик ҡатмарлы эш. Ни өсөн "Аҡҡош күле"н ҡуябыҙ, сөнки ул бар йәһәттән дә көслө эшләнгән, тамашасыны инандырыу һәләтенә эйә, уны илата, актер кисергәндә кисерергә мәжбүр итә.

**▸ Балеттың милләте булмаһа ла, беҙҙә башҡорт балеты бар, тип әйтә алабыҙмы?**

- Балет классик йәки милли була ала. Башҡортостанда йәшәгәс, беҙ башҡорт композиторҙарының башҡорт сюжеттарына нигеҙләнгән, башҡорт темаһына арналған спектаклдәре ҡуйылыуына иғтибар бирәбеҙ. Сөнки Өфөгә килгән кешеләр, ҡунаҡтар милли спектаклдәр менән дә танышырға тейеш. Әммә шуны әйтергә кәрәк: хатта беҙҙең милли спектаклдәр ҙә классикаға нигеҙләнеп ҡуйыла, шуға күрә классик балет та кәрәк. Әгәр классика булмаһа, балет бала булмаясаҡ, ә халыҡ бейеүҙәре ансамбленә әйләнәсәк. Ә башҡорт классикаһы, әйтеүемсә, "Сыңрау торна". Ундағы бар нәмә - тема, образдар, беҙҙең изге ҡошобоҙ торналар, костюмдар, тәбиғәт - барыһы ла милли рух менән һуғарылған. Унда ла аяҡ осонда бейеләр, ләкин ниндәйҙер элементтар башҡорт бейеүенән үҙләштерелгән.

**▸ Бала саҡтан Ленинградҡа киткәс, башҡорт әҙиптәренең китаптарын уҡыу мөмкинлегегеҙ булдымы?**

- Мин шул тиклем Әнүәр Бикчәнтәевты яратам. Дөрөҫөн әйткәндә, рус авторҙарынан тыш, уның китаптары өлгөһендә, бигерәк тә "Ҙур оркестр" әҫәре йөғонтоһонда үҫтем тиһәм дә була. Мостай Кәрим тураһында әйтеп тә тормайым, сөнки уның әҫәрҙәре беҙҙең театрҙа ҡуйылды, ә әҫәрҙең үҙе менән танышмайынса тороп, тулыһынса образға инеү мөмкин түгел. Хыялды бары тик әҙәби китап уҡыу ғына үҫтерә. Был артист өсөн бик мөһим - техника, сыҙамлылыҡ кеүек физик ныҡлыҡ күрһәткестәренән тыш, артистың хыялы сикһеҙ булырға тейеш.

**▸ Элек Өфөгә каникулдарҙа ҡайтҡанда һәм хәҙер иң яраткан урынығыҙ ниндәй, ул ҡайһы урамда урынлашҡан?**

- Һеҙ мине иларға мәжбүр итәһегеҙ, сөнки мин Өфөнө шул тиклем яратам, шундай һорау бирһәләр, шунда уҡ күҙҙәремдән йәш аға башлай. Тормошомда булған иң яҡшы мәлдәр, ул ғына ла түгел, хатта тотош тормош баш ҡала менән бәйле: бала саҡ, атай-әсәй, өләсәйҙәр, туғандар, мөхәббәт, ғаилә ҡороу, улым тыуыу. Ҡайҙа ғына барһам да, самолетта, тиҙҙән Өфө аэропортына ултырабыҙ, тип иғлан итеү менән һәр ваҡыт илайым.

Икенсе яҡтан, Өфө үҙе матур урында урынлашҡан - тау башындағы ҡала, уны көмөш билбау кеүек йылға уратып алған. Бындағы тәбиғәт хозурлығын махсус ҡорҙорһаң да улай килеп сыҡмаҫ. Ҡасандыр Черниковка айырым ҡала ине. Каникулға ҡайтҡан һайын трамвайға ултырып, унда экскурсияға сығып китә инек. Ә Октябрь проспектының буйынан-буйына баҡсалар була торғайны.

Хәҙер Өфө йылдан-йыл үҙгәрә, кем генә булмаһын, мәҫәлән, беҙҙең Нуриев фестиваленә килеүселәр, барыһы ла уның матурлығына, тынлығына, һауаның таҙалығына һоҡлана.

Ә инде иң яраткан урындарым, әлбиттә, Совет майҙаны, Пушкин урамы менән Ленин урамы киҫелешендәге ҡыҙыл бина артындағы йорт, сөнки унда әсәйемдең туғаны йәшәне. Әсәйем фронттан ҡайтҡас, уны улар үҙҙәренә һыйындыра һәм бәләкәй сағымда ике ғаилә бергә йәшәгәнебеҙҙе иҫләйем. Хәҙер ҙә Санкт-Петербургта йәшәүсе ике туған апайым ҡайтһа, ошо ерҙәр буйлап үтәбеҙ. Хәҙерге Ауыл хужалығы министрлығының колонналары артына йәшенеп, атайым менән йәшенмәк уйнай торғайныҡ, Маяковский скверында улым бәләкәй ваҡытта йыш йөрөй инек. Ҡыҫҡаһы - тотош ошо район, телеүҙәк тирәһе, Салауат Юлаев һәйкәле - уларҙың һәр ҡайһыһы ниндәйҙер матур хәтирәләр менән бәйле. Һәм, әлбиттә, икенсе йортома әйләнгән Башҡорт опера һәм балет театры ла күңелемә уйылған! Быйыл минең унда эшләй башлауыма 50 йыл тула...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Боронғо "Һунарсы" бейеүен дә бейейбеҙ - "Сыңрау торна" легендаһын балет сәнғәте аша ла аңлатабыҙ, сөнки беҙ бай мираҫлы халыҡ һәм тарихыбыҙ тәрәнгә китә, шул уҡ ваҡытта заман һулышын йәһәт кенә тойоп алырлыҡ яҡты зиһенлебеҙ ҙә". Яҙыусы Мәрйәм Бураҡаеваның был һүҙҙәренә тәрән хәҡиҡәт һалынған. Быны бөгөн Башҡортостандың балет мәктәбенең Рәсәйҙә иң алдынғыларҙан һаналыуы ла раҫлай - Рудольф Нуриев исемендәге хореография колледжын тамамлаусыларҙың һәр ҡайһыһына Рәсәйҙең төрлө төбәктәренән өс урын тәҡдим ителә, колледжға хатта сит илдәрҙән дә килеп белем алалар, республиканың балет артистары донъя кимәлендә абруй яулай. Башҡорт халҡы өсөн балет, нисектер, ятыраҡ тойолһа ла, моғайын, ысынлап та ул бөгөнгө геройыбыҙ Леонора Ҡыуатова кеүек затлы заттар сәнғәтеләр - унда нәзәкәтлелек тә, хис-тойғолар ҙа, ныҡышмалылыҡ та, сыҙамлылыҡ та, характер ҙа талап ителә һәм сағылыш таба. Башҡорт өсөн был сифаттар ят түгел, ул беҙҙең ҡандан килә, асылыбыҙға һалынған.**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ әңгәмәләште.**

*ҠЫҪҠА ИНТЕРВЬЮ*

# ҺӨЙӘҺЕҢМЕ, ҺӨЙМӘЙҺЕҢМЕ...



**Һөйөүҙең асылы күп ҡырлы. Бәлки, шуғалыр ҙа, һөйөүҙең нимә икәнен аңлауы ҡыйындыр, әммә һөйөүҙең нимә икәнен аңлатыуы тағы ла ауыраҡ. Яңы ғына уяна башлаған тәбиғәт менән бергә күңелдәребеҙҙе һөйөү тойғолары ла иләҫләндерә һәм һөйөү хаҡындағы мәңгелек һорауҙарға яуаптар эҙләп тынысһыҙланаһығыҙ икән, М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрында әле генә сәхнәгә сыҡҡан спектакль тап һеҙҙең өсөн. "Һөйәһеңме, һөймәйһеңме..." тип атала ул. Бер мөхәббәт хаҡындағы хикәйәтте сәхнәгә ҡуйыусы режиссер Илсур ҠАҘАҠБАЕВ менән ошо хаҡта бәләкәй генә әңгәмә.**

**➔ Режиссер булараҡ, Һеҙҙе был пьеса нимәһе менән йәлеп итте?**

- Шундай драматургтар була, уларҙың әҫәрҙәре һәр дәүерҙә лә заманса яңғырай. Мәҫәлән, башҡорт театрҙары сәхнәһенә Мостай Кәрим гел әйләнеп ҡайтып тора. Флорид Бүләков та шундай ижадсыларҙың береһе.

Һәр кем үҙенең был тормоштағы йәшәү мәғәнәһе тураһында уйлана. Хатта беҙ "Кем мин? Нимә өсөн йәшәйем?" тигән риторик һорауҙарға ҡабат-ҡабат әйләнеп ҡайтабыҙ. Был пьесала мине бер нәмә һиҫкәндерҙе: ҡарсыҡ, ғүмеренең аҙағында ғына булһа ла, эргәһендә йәшәгән ҡартының уны һөйөм тип әйтеүен ишетер өсөн генә йәшәгән булып сыға. Ҡарсыҡтың төп йәшәү мәғәнәһе - ошонда. Дөрөҫөрәге, ҡарт был тойғоноң һөйөү икәнен аңлай. Уның йәшәүенең мәғәнәһе - ошоно аңларға тейеш булыуҙа.

Пьесаны уҡып сыҡҡас, ни өсөн Хоҙай Тәғәлә уларға бала бирмәне икән, тип тә күп уйланым. Балалары булһа, ҡатындың бөтөн иғтибары иренән балаға күсер ине лә, улар Күктәр тарафынан һалынған үҙ бурыстарынан тайпылырҙар ине, моғайын. Автор ошо яҙылмаған ҡанундарҙы бик нескә тойоп эшләгән.

**➔ Тимәк, спектакль һөйөү тураһында?**

- Минеңсә, мөхәббәт ике өлөштән тора. Ул кешегә шатлыҡ алып килә, кешенең тормошон матурыраҡ итә, ҡанатландыра ла. Шул уҡ ваҡытта мөхәббәт ғазапландыра ла, ул күп кенә трагедияларҙың сығанағы. Борсолоуҙар, көнсөллөк, хәүефләнеү уның менән бәйле. Мөхәббәттә ҡапма-ҡаршы ике тойғо берләшә: шатлыҡ һәм һағыш, таң ҡалыу һәм күңел һүрелеү. Шуға ла спектаклдә ике персонаж бар - балерина һәм кәзә тәкәһе. Һөйөүҙең ошо ике өлөшө балерина һәм кәзә тәкәһендә сағылыш таба. Пьесала ла бар бер килеп сығып, бер кире юғалып йөрөгән ике образ, автор уларҙы Кәзә тәкәһе һәм Себеш тип атай. Ҡарсыҡ спектаклдең башында уҡ сәхнәгә яңы ғына моронлап сыҡҡан себеш менән килеп сыға, ә һуңында ҡарсыҡ үлә, себеш сәхнәлә ҡала. 1992 йылда режиссер Рифҡәт Исрафилов был пьесаны сәхнәләштергәндә ҡурсаҡ кәзә тәкәһе ҡуллана, ул тәҙрәнән генә күренепкүренеп ҡала. Миңә был спектаклдең яҙмаһын ғына күрергә насип булды. Яҙмала күренмәй, әммә өлкән быуын артистары һөйләүенсә, унда сәхнәлә тере тауыҡ, себештәр, хатта әтәс була, йәғни, был образдарҙы Рифҡәт Вәкил улы ла ҡулланған. Үҙ заманы өсөн бик актуаль була был спектакль, "Һөйәһеңме, һөймәйһеңме..." трагикомедияһының был ҡуйылышы ла бөгөнгө көн өсөн заманса булыр, тип ышанам.

**➔ Тамашасы был спектаклде ҡарағандан һуң ниндәй һығымталар яһарға тейеш, тип уйлайһығыҙ?**

- Тамашасы берәй нәмә аңлар өсөн килмәй спектаклгә. Ғөмүмән, мин кешене үҙгәртеп була тигәнгә ышанмайым. Әле Мәскәүҙә, ГИТИС-та уҡып йөрөгәндә миңә бер шәхес, театр бер кемгә лә бер нәмә лә тейеш түгел, тип әйткәйне. Мин быны менән килешмәгәйнем дә, әммә бөгөн мин үҙем дә шулай уйлайым. Ул ниндәйҙер бер темаға мөрәжәғәт итеп, уны күрһәтә генә. Әгәр ҙә театр дауалай алһа, беҙ, мәҫәлән, эскелек тураһында спектакль ҡуйыр инек тә, бөтә эскеселәр был шөғөлдәренән баш тартыр ҙа ҡуйыр ине. Шуның кеүек, был спектаклде ҡараҡас, кемдер - аңлар, кемдер бер нәмә лә аңламаҫ, ул кемгәлер оҡшар, кемгәлер - юҡ. Уларҙың аңламауында ла бер насарлыҡ та юҡ. Быны мин дә ҡайһы бер спектаклдәрҙе ҡарағандан һуң бер нәмә лә аңламайым, әммә күңелдә йылы тойғолар ҡала, рәхәт булып китә. Театрҙың төп тәғәйенләнеше лә ошондалыр.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Был пьеса - оҙон йылдарға һуҙылған, әммә үҙенең көсөн юғалтмаған һөйөү тураһында. Һәр кем тап ошондай тойғолар хаҡында хыяллана һәм былдай һөйөүгә тап булғандар бәхетле", - тигән был трагикомедия тураһында Флорид Бүләков үҙе ҡасандыр. Шуға ла спектаклде ҡарарғамы, юҡмы, тигән һорау тыуырға ла тейеш түгел. Ролдәрҙе башҡарыусыларҙың, шулай уҡ режиссерҙың һәр алымы ни тиклем үҙен аҡлауын күрер өсөн бер генә түгел, күп тапҡыр ҡарарға ла мөмкин уны.**

**Ләйсән НАФИҠОВА әңгәмәләште.**

***✓ "Халыҡ дошмандары" - бына ошо һүҙ мейене сүкене. Улар халыҡ дошмандары. Ҡыҙ ҡалтыранды. Былай ҡара төндә бер нәмә лә алмай сығып китеүҙәренә, атаһының атты бар көсөнә ҡыуыуына ҡарағанда, улар өҫтөнә бәлә килә.***



# АДЪЮТАНТ

Хикәйә

**Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА**

Илдә совет иле дошмандары менән көрәшеү дауам итте. Һәр мәктәптә ағартыу эштәре алып барылды. Бына тағы ла Кәримә үҙе өсөн үтә лә ауыр булған һорау менән атаһы янына килеп баҫты. Бөгөн мәктәптә халыҡ дошмандары тураһында лекция уҡынылар.

- Атай, милләтселәр, бандиттар тамам ҡыйратылған, ивет. Әбделмән ҡыҙын ҡаршыһына ултыртты.

- Ниндәй милләтсе? Улар нимә эшләгән?

- Уҡытыусы апай әйтте. З. Вәлиди шундай булған, ти.

- Ҡыҙым, мин З. Вәлидиҙең һалдаты булдым. Ни бары бер һалдаты. Ул бөйөк эштәр атҡарҙы. Ваҡыт етер, һин былар тураһында белерһең. Ә уҡытыусың был оло затты күреү түгел, бер әйткән һүҙен дә үҙ ҡолағы менән ишетмәгән. Беҙ ошо ерҙә тыуып үҫкән башҡорттар. Ерһеҙ ҡалмайыҡ, урман-һыуҙарыбыҙҙан яҙмайыҡ, тип ҡулға ҡорал алырға мәжбүр булдыҡ. Ағай-энеләр, күрше-күлән. Беҙме хәҙер килеп бандит? Беҙҙең беребеҙҙә лә ҡорал юҡ. Ҡоралыбыҙ - бына ошо ҡулдар. Хеҙмәт өсөн иген үҫтерер, бала һөйөр өсөн бар ителгән ҡулдар. Эйе, заманында имен тормош төҙөргә, тип ҡоралланырға мәжбүр булдыҡ. Беҙ генә түгел! Бөгөн дә имен мул тормош, бәрәкәт өсөн көрәшәбеҙ. Ҡулда тупраҡ, иген еҫе генә. Беҙҙең төп маҡсат элек тә ошо ине. Хәҙер ҙә шул маҡсат, балам. Халыҡ Вәлидиҙең исемен йөрәгендә йөрөтә. Йөрөтәсәк. Күп исемдәр онотолор, ләкин уның исеме башҡорт йәшәгәндә йәшәйәсәк.

Кәримә ҡып-ҡыҙыл булды. Бер яҡтан, ул уҡытыусыһы һүҙенә ышана. Икенсе яҡтан, атаһының ғәҙеллеген белә. Уның һүҙен кире ҡағыу мөмкин түгел! Ләкин уларҙың фекерҙәре ҡапма-ҡаршы. Был көндән һуң Кәримә тынғылығын юғалтты. Ул атаһының хаҡлығын аңлай. Ләкин уҡытыусыһына ла ҡаршы тора алмай! Шуға ла үҙен уҡытыусы ҡаршында ғәйепле тойҙо. Сәүит власы алдында. Унда эшләгән кешеләр алдында. Бына шулай. Ғәйебен юйыр өсөн мәктәптә уға икеләтә тырышырға тура килде. Фәндәрҙән тик бишкә генә өлгәште. Активист булып танылды. Спортты бәләкәйҙән яратты. Атаһы уны етеҙлеге менән үҙемә оҡшаған, тип хуплай.

Сәйәсәт ай түгел, көн һайын үҙгәрә барҙы. Тарих битенән юйылырға, халыҡ хәтеренән алып ташланырға тейешле ваҡиғалар буйынса указдар, ҡарарҙар сыҡты. Азатлыҡ өсөн көрәшкән ҡайһы бер шәхестәргә ҡара яғылды. Хөкүмәт элек биргән вәғәҙәләрен онотто. Онотто ғына түгел, яһиллығын арттырып, шпиондар, диверсанттар һәм башҡа совет ҡоролошона зыян килтереүселәрҙе "фашлау" көсәйҙе. Сәйәси фекер ҡаршылыҡтары инҡар ителде, улай ғына ла түгел, совет дәүләтен төҙөү эшенә күптән бирелгәндәр ҙә ҡулға алына ине. Тоғролар, инанғандар шик аҫтына эләкте, арҡаға бысаҡ ҡаҙау дауам итте.

Бер көндө Кәримәләрҙең ишек алдына пинжәк кейгән төҙ баҫып атлаған ят бер ағай килеп инде. Уның атлауы, үҙ-үҙен тотоуы ауылдыҡыларҙан айырылып тора. Ихатала уйнап йөрөгән бала-саға алдында үҙен ябай тоторға тырышһа ла, ни тиклем йылмайһа ла, Кәримә һағайҙы. Йәһәтләп атаһын саҡырырға өйгә инеп китте. Теге ҡара пинжәкле әҙәм уның артынса уҡ туфалта аша үтте. Кәримә тышҡа сығырға уҡталған атаһының туҡтап ҡалғанын күрҙе. Ишек алдында бер аҙ йөрөй биргәс, Кәримә һаҡ ҡына соланға инде. Һөйләшкәндәре ишетелә. Теге сәйер әҙәм атаһының үткәне менән ҡыҙыҡһына шикелле. Атаһының тауышы асыҡ:

- Беҙ үҙ инаныуыбыҙ менән бер булып ҡыҙылдар яғына сыҡтыҡ. Артабан сәүит хөкүмәтен төҙөшөүҙә фиҙаҡәрлек иттек. Беҙ әҙәм балаларына хас нәфсене үлтереп, халыҡҡа хеҙмәт итеүҙе данланыҡ. Шулай булды. Антыбыҙҙан - ватаныбыҙға, милләтебеҙгә хеҙмәт итеүҙән тайпылғаныбыҙ юҡ. "Бөтә илдәрҙең пролетарийҙары, берләшегеҙ!" - ошо уҡ принципты сағылдыра. Беҙ уны ҡабул иттек. Үҙебеҙҙең балалар ас булғанда ла ярлының, фәҡирҙең балаларына тәү сиратта ярҙам ителде. Башҡорт полкында булып, аҙаҡ йот йылдарында үҙҙәре астан шешенгән, йығылғандар тураһында әйтергә лә түгел. Улар яңы власть өсөн йәндәрен аяманылар... Күпселеге социалитик ҡоролошто яҡлап баш һалды.

Ә илдә халыҡ дошмандарын аулау көсәйгәне. Улар тураһында мәктәптә лә йыш һөйләйҙәр. Шундай тынысс тауышлы атаһына Кәримә аптыраны. Ул илдә нимә барғанын белмәйме икән әллә? Шулай ҙа был кеше киткәс, атаһы уйсанланып ҡалғандай тойолдо ҡыҙыҡайға.

* * *

Был кисте Кәримә, нишләптер, оҙаҡ йоҡлап китә алмай ятты. Борғосланды, тулаңы. Ойоп ҡына бара ине, кемдеңдер ипләп кенә тәҙрә сирткәненән тертләп уянды. Уғаса булмай, һаҡ ҡолаҡ атаһы ялп итеп тышҡа сығып та китте. Кем төн уртаһында борсоғандыр ҙа, нимә тураһында һөйләшкәндәрҙер, ишетелмәне. Бер аҙҙан атаһы шулай уҡ шым ғына атлап килеп инде.

- Әсәһе, уят та, кейендерә һал балаларҙы... - тип кенә әйтте лә, кире сығып та китте. Шул тиклем тиҙ юҡ булды, хатта Кәримә: "Атай, кем булды ул?" тип һорарға ла өлгөрмәне.

Күндәм, баҫалҡы Зәкирә апай бауырҡайҙарын уятырға кереште. Инде һикереп тороп ултырған Кәримә ҙур асылған күҙҙәрен әсәһенә төбәне:

- Нимә булды, әсәй?!.

- Ҡустыларыңды кейендереш. Сеү, сыуылдашмағыҙ, балалар. Атайығыҙ асыуланыр. Йәһәтерәк ҡыймылдағыҙ...

Улар туфалтаға сығып баҫҡансы, Әбделмән ағай атын егеп өлгөргәйне. Береһенән-береһе ыуаҡ алты балаһын йылы һүҙҙәр менән әүрәтә-әүрәтә арбаға тейәне, етенсеһен - имсәк балаһын ҡосаҡлаған Зәкирә апай ире янынан урын алды. Инде ауылдан сығып китеүҙәренә күпме, ә атаһы атты туҡтауһыҙ ҡыуыуын белде. Ат хәленән килгәнсә тырышты.

- Әсәй, беҙ ҡайҙа киттек? - тип бышылдап ҡына һорай Кәримә.

Нишләптер, әсәһе яуап бирмәй.

- Әҙерәк серем итегеҙ, - ти ул. Тик хәүефләнеүен йәшерә алмай, тауышы өҙләгә. Бәләкәс ҡустылары бер аҙ бәүелеп бара биргәс, мышнап йоҡоға китте. Ә Кәримә керпек тә ҡаҡмай, иренен тешләп, бөршәйеп ултыра бирҙе.

"Халыҡ дошмандары" бына ошо һүҙ мейене сүкене. Улар халыҡ дошмандары. Ҡыҙ ҡалтыранды. Былай ҡара төндә бер нәмә лә алмай сығып китеүҙәренә, атаһының атты бар көсөнә ҡыуыуына ҡарағанда, улар өҫтөнә бәлә килә. Атаһы ҡотолорға маташа. Береһенән-береһе ыуаҡ ете бала... Ҡайҙа кем көтөп тора уларҙы? Алда нимә һағалай? Ҡайҙа һыйынырҙар? Кемгә кәрәктәре бар? Был юлдың башы ғына, ә аҙағы нисек бөтөр? Ҡуйсы-ҡуйсы-ҡуйсы... Арттарынан ҡыуа сыҡһалар, эш харап. Атып китһәләр, берәү ҙә белмәйәсәк тә, күрмәйәсәк тә. Атай атты ҡыуа. Атай атты ҡыуа ғына. Атаһы атты бер ҡасан да улай ҡыуғаны юҡ ине!

Һалбырғолаҡ ат менән йәнәш саба. Ул да бәлә килгәнен тоялыр, шымтайған...

Әсәһе яңылыш үҙәген тартты мы, ҡапыл эсенән иңрәү тауышы сыҡты. Үҙе йәһәт кенә ауыҙын ҡапланы ла, иренә күтәрелеп ҡараны. Шул ыңғайҙан атаһы аттың дилбегәһен уңға тартты һәм улар ҡайырылып аҫҡа сауҡалыҡҡа төшөп киттеләр. Әбелмән ағай атын туҡтатыу менән, бер соҡор урынға күрһәтте.

- Әсәһе...

Үҙе атты арыраҡ алып китте, арбалағы һалам араһынан нимәлер килтереп сығарҙы. "Винтовка!" Кәримәнең йөрәге ярыла яҙҙы. Тимәк, улар эҙ яҙлыҡтыра алмағандар, арттарынан ҡыуып етеп киләләр. "Һалбырғолаҡ, ят! Ҡуҙғалма! Һаҡла бәләкәстәрҙе!" Хужаһын тыңлаған Һалбырғолаҡ лыпын ятты. Ә Әбделмән ағай кире килгән юлға ташланды. Үҙе бер ыңғайҙан, ни өсөндөр, сәсен туҙҙыра ине. Кәримәнең эс-бауырын нимәлер өтөп-өтөп алды. Тимәк, үлтереш буласаҡ... Ҡурҡыныс-ты тойған балалар ҙа ҡоршайып ҡалдылар. Әсәһе иң бәләкәсе биш айлыҡ Йәғәфәргә имсәген ҡаптырҙы. Кәримә игеҙ ҡустыларын ҡосағына алды, ҡалғандары әсәйгә һыйындылар. Ике тәпәйен һуҙып, ҡолағын ҡарпайтып ятҡан Һалбырғолаҡ ҡыбырламай... Оло юлда аттар кешнәште. Ирҙәр тауышы ишетелеп ҡала. Атаһыныҡы түгелме? Юҡ шикелле. Әллә ниндәй сәйер ауаздар сығара был әҙәм. Игеҙәктең береһе ауыҙын бөршәйтә, иларға итә. Кәримә йәһәт кенә ҡустыһының ауыҙын ҡаплай. Өн сығара ҡалһа, туғанын тонсоҡтороорға әҙер, тик эҙәрлекләүселәрҙең генә ҡулына эләкмәҫкә! Малай аңлағандыр, фәҡәт күҙенән бөрсөкләп йәше генә аҡты. Нимә шул тиклем ныҡ дөпөлдәй? Кәримә һаҡ ҡына тирә-яҡҡа күҙ йүгертте. Ат тояғымы? Әллә атыш тауышымы? Юҡ, уның йөрәге күкрәктән сығырҙай булып тибә лә баһа! Һуң, бөтөн урманға яңғырай түгелме дөпөлдәү? Дошмандарҙың ҡолағына барып ҡаҡлыҡмаймы был дарҫлау, юллап килеп баҫмаҫтармы? Әсәһе бәпәйгә имсәген ҡаптырып, күкрәгенә ҡыҫҡан. Кәримә ҡустыһының ауыҙын ҡыҫып тотҡан. Ыҫҡындырмай, сөнки ҡулын алһа, туғаны урман яңғыратып һөрән һалыр кеүек. Күпме ваҡыт үткәндер, быныһын ул әйтә алмай, бер мәл ағастар араһынан таныш һын шәйләнде. Атаһы бер үҙе ине... Кәримәнең матҡып тотҡан ҡулы яҙылды. Ҡустыһы алдына шыуып төшөп ятты. Ул һуштан яҙғайны. Әбделмән ағайҙың сәсе-башы туҙған. Ҡулында ҡоралы юҡ. Бына ул ҡыҙы янына килеп сүгәләне. Бер ҡулы менән улын күтәрҙе, икенсеһе менән ҡыҙын ҡосаҡланы.

Кәримә эҙәрлекләүселәрҙән ҡотолғандарын аңланы.

"Нисәүҙәр ине?" тип һорай әсәһе, балаларға ишеттермәҫ өсөн бышылдап ҡына. Атаһының тауышы көслө. Ул ғөмүмән, бышылдап һөйләшә белмәй:

- Бишәү.

Кәримәнең тыны ҡыҫылды. "Бишәү!" тигән һүҙ мейене сүкене. Атаһы һәм шул бишәү араһында нимә булды? Нимә эшләтте атаһы ҡулға алырға йыйынған биш чекисты? Бөтөнөһөн дә атып үлтерҙеме икән? Булманымы икән ни бүтән сараһы? Кәримә өсөн был сер булып ҡалды.

Бер аҙҙан атаһы тағы ла ҡайҙалыр барып килде. Йөҙөндә тыныслыҡ. Инде атаһынан күҙ яҙлыҡтырмаған Кәримә үҙен ҡулға алған һымаҡ булғайны, тик бер аҙҙан йәнә ҡалтырауы башланды. Туңды, хатта телен әйләндерергә хәле юҡ ине. Теге бишәүҙең кем тарафынан һәм ни өсөн атылғандары, ҡасан да булһа, асыҡланасаҡ бит. Уларҙы ер аҫтынан да килеп табасаҡтар. Ҡотолоу юҡ. Был юл ваҡытлыса. Был юл алдыҡ. Себер юлы көтә уларҙы, йылан булып һығыла, бөгөлә, һуҙыла. Атаһы йәш сағында башҡорт ғәскәрендә йөрөмәһә, ошо хәлгә тарымаҫтар ине бит! Нишләп шул саҡтарҙа балалары тыуасағын, улар ыҙалаясаҡтарын уйламаны икән? Балаларының киләсәгенә атҡанын белмәнеме икән? Хәҙер ҡайҙа ғына барып һыйынырҙар?

Өҙөлгән юлды дауам иттеләр. Кире арбаға менеп ултырған Кәримәне йәнә сәйер бер тыныслыҡ биләп алды. Иң мөһиме, улар бит ҡотолдолар. Берәү ҙә уларҙы ата-әсәләренән айырманы. Туғандар бергә. Уның атаһы көслө, ҡолонсаҡтары хаҡына хәленән килгәнде, хатта хәленән килмәгәнде лә эшләйәсәк. Атаһы мәргән, атаһы уҡсы. Атаһына ла винтовка күптән тоҫҡалған. Снайпер - яңы власть үҙе. Ләкин атаһы мәргәнерәк.

Бара биргәс, Кәримә шундай ҡаты йоҡоға талды. Хатта әсәһе уятҡас, үҙҙәренең юлда булыуҙарын бер талай иҫенә төшөрә алмай ятты. Артабан Ҡаҙағстан тарафына юлландылар, унда бер станцияға килеп еттеләр. Атаһы шунда тимер юлда ябай эшсе булып эшләй башланы. Кәримә был хәлдән һуң уйсан ҡарашлы кешегә әйләнде. Ул элекке шикелле илгәҙәк, донъяға асыҡ ҡараш менән баҡҡан зат түгел ине. Ҡырыҫланды. Ҡай саҡ үҙе лә һиҙмәй ҡыҙып китә, әсәһе был холҡона аптырай, ләкин артығын өндәшмәй, баш сайҡап ҡына ҡуя. Ни хәл итәһең... Кәримә үҙендәге үҙгәрештең төп сәбәбен ҡысҡырып әйтмәһә лә, эстән күп тапҡыр ҡабатлағаны бар: "Атайым ғәйепле. Ул геройланып Вәлиди ғәскәрендә йөрөмәһә, ошо хәлгә тарымаҫ инек. Бер ыҙа күрмәй тыуған ауылда йәшәп тик ятыр инек. Атайым эгоист. Һаман шул йылдарҙы, дуҫтарын яуҙаштары тураһында һөйләй. Беҙҙе харап итә яҙғанын нисек һаман аңламай?" Эстә асыу ҙа ҡайнап китә. Ләкин атаны яратыу көслөрәк, шул еңә. Барыбер Әбделмән ағай Вәлиди, азатлыҡ хәрәкәте тураһында һөйләй башлаһа, ҡыҙ тиҙ генә сығып тая ине.

**(Дауамы бар).**

***Өс тиҫтәгә яҡын ҡәләм тирбәтеүсенең ижади ҡомары тураһында һүҙ барҙы осрашыуҙа. Яҙышҡан бөтә кеше лә яҙыусы, шағир булып китә алмай, әммә ошо әҙәбиәт даръяһының бер тамсыһына әйләнә, уға хеҙмәт итә.***



ӘҘИПТӘР ҠОРО

**Тормош ҡуласаһы бер генә мәлгә лә туҡталыу белмәй. Дәүерҙәрҙе дәүер алмаштырып, бер ҡоролош урынына икенсеһе барлыҡҡа килеп, йә һиллектә, йә йөрәктәрҙе өшөтөр ыҙғыш-сыуалыштарҙа сағылып, донъя йомғағы һүтелә-һүтелә үҙ юлынан тәгәрәй. Меңәр-меңәр йыл шулай булған һәм шулай буласаҡтыр, күрәһең. Әммә ошондай мәлдәрҙә лә йәшәүҙән йәм-тәм табып, кешелек асылын юғалтмай, рухын байытып, илдең үткәне менән ғорурланып, киләсәген уйлап йәшәй халҡыбыҙ. Халыҡты йәшәтеүсе көс - ул милли үҙаң, әҙәп, иман, йәндәй күргән ғәзиз тыуған ер, үҙенсәлекле, ҡабатланмаҫ биҙәкле туған тел, йырлы-моңло өн-һүҙҙәребеҙ.**

# ОСРАШЫУ АСЫШТАРҺЫҘ БУЛМАНЫ



"Яхъя бәйән иткән яҡшы хәбәр" исемле китапта шундай юлдар бар: "Иң башта Һүҙ булған. Һүҙ иң башта уҡ Аллаһы менән булған. Бөтә нәмә Һүҙ аша яратылған, һәм яратылған һәр нәмә Унан башҡа яратылмаған. Унда (Һүҙҙә) тормош булған, һәм шул тормош кешелеккә яҡтылыҡ биргән..."

Шағирыбыҙ Ҡәҙим Аралбайҙың:

*Һүҙ-ташҡын да:*
*йыуып ташлай йылдар туҙанын,*
*Һүҙ-осҡон да:*
*тоҡандыра ыҙғыш усағын,*
*Һүҙ-ҡаяу ҙа:*
*ыуы менән һибә михнәтен,*
*Һүҙ-дауа ла:*
*йәнгә бөркә йәшәү сихәтен... -*

тигән һүҙҙәрендә лә оло хәҡиҡәт яталыр. Ысынлап та, Мостай Кәрим һүҙҙәре менән әйтһәк: "Һүҙ бит аралашыу ҡоралы ғына түгел, ул гүзәллекте аңлатыр кеше рухының үлсәме, күрһәткесе".

Ошо көндәрҙә үҙенең ижади емештәрен бына ошо үлсәмдәргә - шиғриәт бизмәненә һалып ҡарарға теләүсе Белорет районының" Иҙел башы" әҙәби ойошмаһы ағзалары һәм мәктәп уҡыусылары, Учалы, Әбйәлил райондарының төрлө йәштәге ҡәләм тибрәтеүселәре, һауа торошоноң көйһөҙлөктәренә лә ҡарамай, әҙәби кәңәшмәгә йыйылды. Унда Өфө ҡунаҡтары - үткер һүҙле, аныҡ, тос фекерле Дамир Шәрәфетдинов, аҫыл шиғриәтебеҙҙең матур бер биҙәге Тамара Искәндәриә һәм ғалимә Ғәҙилә Бүләкова ла ҡатнашты.

Ундан ашыу кеше үҙ эштәрен тәҡдим итте шиғриәт бүлеге оҫталарына. Уҡып та, фекер төйнәп тә, тәҡдимдәрен әйтеп тә өлгөрөргә кәрәк ине килгән әҙиптәребеҙгә. Ауырға төштө, шулай ҙа, ваҡыттарын йәлләмәй, бер аҙналыҡ эште бер көндә атҡарып сыҡты улар. Ҡайһы бер йәштәребеҙгә Дамир Шәрәфетдиновтың һүҙҙәре ҡатыраҡ булып та бәрелгәндер (тураһынан һалдыра шул ул). Тәнҡит һүҙҙәрен көймәй-асыуланмай үткәргәндәр - үҙ баһаһын күтәргәндәр, тип бушҡа әйтмәйҙәр бит. Хирург та, ауырыу һауыҡһын өсөн, башта ныҡ итеп ауырттыра, унан һауыҡтыра икәне һәммәбеҙгә лә мәғлүм. Ә Тамара Искәндәриәнең хисле, изгелекле, доға-фатихалы һүҙҙәре, бар шик-шөбһәләрҙе юйып, ҡәләм тибрәтеүселәр күңеленә өмөт нуры һипте. Төплө кәңәштәрен биреп, нескә күңел ҡылдарына һаҡ ҡына сиртеп, дөрөҫ йүнәлешкә юл асты әҙиптәр. Һүҙ бәҫен, һүҙ баһаһын, фекер ҡеүәһен аңлай-тоя белгәндәргә яҡшы һүҙҙәрен дә йәлләмәнеләр. Әҙ һөйләп, күпте аңлата алыуҙарына, күҙгә-күҙ ҡарап, сурытмай, һүҙҙәрен үлсәп, уйлап ҡына әйтеүҙәренә һоҡланмау мөмкин түгел уларҙың.

Осрашыуҙар бер ҡасан да осраҡлы булмай. Һәр осрашыуҙан яңылыҡ, күңелдәрҙе бәйләр йылылыҡ ҡала. Беҙ ҙә был осрашыуҙан иҫ китмәле фәһемле мәғлүмәттәр алдыҡ. Танылған әҙиптәребеҙ менән ҡара-ҡаршы ултырып, ваҡыт үткәнен дә һиҙмәй һөйләшеү, йәнле аралашыу, уй-хистәребеҙ менән уртаҡлашыу барыбыҙҙың да күңеленә хуш килде. Өс тиҫтәгә яҡын ҡәләм тирбәтеүсенең ижади ҡомары тураһында һүҙ барҙы осрашыуҙа. Әлбиттә, был яҙмаларҙың бөтәһе лә әле шиғыр, ә үҙҙәре - шағир түгел, сөнки шиғриәттең буй етмәҫлек ҡанундарына тулыһынса яуап биреү - бик һирәктәргә тейгән өлөш. Яҙышҡан бөтә кеше лә яҙыусы, шағир булып китә алмай, әммә ошо әҙәбиәт даръяһының бер тамсыһына әйләнә, уға хеҙмәт итә. Йөрәк аша үткән уй-хистәрҙән фәһем алырлыҡ кәрәкле мәғлүмәттәрҙе һайлап алып, туплап, үҙ ҡараш-фекере призмаһы аша үткәреп, ташҡа баҫтырыу - оло хеҙмәт. Ташҡа баҫылғандар юғалмай - быны беләбеҙ. Ошо бәләкәй генә яҙмаларҙың ҡасандыр бик кәрәкле булыуы ихтимал. Хатта оло йәштәрҙә лә кисеүҙәрҙе кисә, иңенә төшкәнде ауырһынмай ғына күтәреп, өмөт менән алға барыу төрлө уйҙарға һала. Ошондай саҡтарҙа, күңел хистәре тулышып, ҡулыңа ҡәләм алаһың. Кем белә, әле камил да булмаған ошо бәләкәй генә яҙмаларҙан йәштәрҙең яҙмыш юлы башланалыр ҙа. Тик әҙәбиәт тигән оло донъяға аяҡ баҫҡас, уға илкеһалҡы ғына, ваҡыты-ваҡыты менән генә мөрәжәғәт итеү яҙыҡтыр. Яҙышырға йөрьәт иттеңме, тырыш, өйрән, ташлама, сөнки уңыш уңғандарға ғына эйәрә. Шуныһы мөһим: бер-беребеҙгә тоғро була белгән кеүек, шиғриәткә лә тоғролоҡ һаҡлау кәрәклеген бер ҡасан да онотторға ярамай.

Башҡалар күңелендәге үҙеңә ауаздаш матурлыҡты ла күрә белеү - оло рухи хазина, һәм уны һәр саҡ үҫтереү зарур икәнлеген аңлау ҙа үҙе ҙур табыш ине күптәребеҙ өсөн. Шағирҙарҙы көн дә күреү, уларҙың һынсыл ҡараштарын тойоу, аралашыу һирәк эләкһә лә, бик берәгәйле, асыҡтан-асыҡ, онотолмаҫ һөйләшеү булды был осрашыуҙа. Һәр осрашыуҙың ниндәйҙер асышы булған кеүек, бында ла өмөт бағларҙай исемдәр танылды. Был исемлеккә һис шикһеҙ Рәсимә һәм Зөлфиә Сәлиховаларҙы индерергә була. Инйәрҙән килгән Әлиә Саматованың хикәйәһен тыңлап, баһалаусылар алдан һөйләшеп ҡуйған кеүек, өсөһө бер юлы баш бармаҡ сөйөп күрһәтте. "Иҙел башы"ның ишеген тәүләп шаҡыуына бер йыл ғына булһа ла, ойошмала һәләтле, киләсәге өмөтлө булған прозаик тыуып килеүен таныу булды был. Эш барышында әҙиптәребеҙ ябай, аңлайышлы ғына итеп етешһеҙлектәрҙе лә асып һалып, төҙәтеү юлдарын күрһәттеләр, аҡыллы кәңәштәрен бирҙеләр, уңыштар теләнеләр. Йөрәктән сыҡҡан һүҙ йөрәккә етә шул! Ижадсы донъяһы - үҙе бер сер, үкенескә ҡаршы, бер осрашыуҙа ғына уны асып һалыу мөмкин түгел. Шуға ла ихлас теләктәребеҙҙе еткерергә ниәтебеҙ: бер-беребеҙҙе байытҡан, күңел ҡылдарын сирткән ошондай осрашыуҙар йышыраҡ булһын ине!

**Мәүлиә САФИУЛЛИНА.**
**Әбйәлил районы**
**Байым ауылы.**

ИҒТИБАР: АКЦИЯ!

# ҺӘР КЕМ УҠЫРҒА ТЕЙЕШЛЕ...

## йөҙ башҡорт китабы




**"Башҡорт китабы топ-100+" акцияһына килгән хаттарҙы барлауҙы дауам итәбеҙ. Һеҙ ҙә башҡорт әҙәбиәтендә һәр быуын кешеһенең иғтибарына лайыҡ әҫәрҙәрҙе/китаптарҙы тәҡдим итеүҙән туҡтамағыҙ, хөрмәтле гәзит уҡыусылар!**

**48. Рәйес Түләк һәм Әхмәр Үтәбайҙың "Буранбайҙың яҙған хатын уҡып..." китабы.** "Һәр башҡорт уҡып сығырға тейеш китаптар исемлегенә Рәйес Түләк һәм Әхмәр Үтәбайҙың поэмалары һәм шиғырҙарынан торған "Буранбайҙың яҙған хатын уҡып..." тип аталған китабын тәҡдим итәм. Был китапты башҡортмон тигән кеше тулҡынланыуһыҙ, хатта күҙ йәштәрһеҙ уҡый алмайҙыр, тип уйлайым. Рәйес Түләктең "Яныу" поэмаһы, Үтәбайҙың "Уяныу" шиғыры, "Мин - Буранбай" поэмалары менән башланып киткән был китап милләтенә һәм диненә, тыуған еренә, туған теленә битараф булған күптәрҙе "йоҡоһанан уятырлыҡ".

*"...Минең яфа сиккән себерҙәрҙән*
*Ҡайтарығыҙ анау уландарҙы.*
*Үҙебеҙҙә күпме байлыҡ ята,*
*Ер ярата белә уңғандарҙы"*, - тигән әрнеүле шиғыр юлдары Әхмәрҙеке булһа, киләһе үҙәк өҙөрлөк һүҙҙәрҙе Рәйес Түләк яҙа:

*"...Типһә, тимер өҙөр төҫлө ине,*
*Бер бәһлеүән ине торғаны.*
*Майҙанда ал бирмәҫ көслө ине,*
*Араҡының булды ҡорбаны".*

Ниндәйҙер бер тәмле нәмә хаҡында күпме генә һөйләһәң дә, үҙең татып ҡарамайынса, уның хаҡында тулыһынса белеп еткереп булмаған кеүек, был китапты ҡабаланмай ғына, тәмләп кенә уҡып сығыу кәрәк. Шундай тетрәткес әҫәрҙәрҙе уҡымаған кеше күп нәмәнән мәхрүмдер. Илһөйәрлек рухы менән һуғарылған, ифрат та ҡыйыу яҙылған был йыйынтыҡ йәштәребеҙҙе патриотик тәрбиәләүҙә ҙур роль уйнар, тигән ышаныс бар. Бергә уйнап үҫкән ауылдаш был ике шағирҙың ошо китабындағы күп кенә әҫәрҙәрен өлкән йәштәге мәктәп уҡыусылары өсөн синыфтан тыш уҡыу дәреслектәренә лә индерерлек", - ти яҙыусы Хәлил Һөйөндөков хатында.

**49. Әмир Әминев "Ҡытайгород".** "Заман әҙәбиәте өлгөләренән мин Әмир Әминевтың "Ҡытайгород" повесын тәҡдим итәм. Һәр ижадсының - шағир булһынмы, яҙыусы йә йырсы булһынмы - үҙенең уҡыусылары була. Әмир Әминевтың повесть-хикәйәләрен иһә, барыһы ла яратып уҡый. Сөнки уның яҙған әҫәрҙәре беҙҙең замандаштарҙың проблемаһын сағылдыра. Әҫәр тыуған илебеҙҙе, тыуған еребеҙҙе ҡурсалау, рухыбыҙҙы һаҡлау, ата-бабалар васыятына тоғро булыу, айыҡ тормош алып барыу, ауыл йәшәйеше менән ҡала араһындағы айырмалыҡтар, йәштәргә эш табыу, халыҡты ҡайғырта белеүсе етәкселәр мәсьәләһе кеүек ҡырҡыу проблемаларҙы күтәргән. Был әҫәр бер кемде ле лә битараф ҡалдырмай. Бына шундай әҫәрҙе тыуҙырғаны өсөн дә Әмир Әминев Рәсәйҙең бик дәрәжәле Ҙур әҙәби премияһына лайыҡ булды. Әҫәр фантасмогорик жанрҙа ижад ителгән, шулай ҙа повестың сюжеты: "Кешем, абай бул! Халҡым, уяу бул!" - тигән кеүек", - тип яҙа Гөлсөм Монасипова.

**50. Шакир Янбаев "Зәңгәр сатыр".** "Бик оҫта хикәйәсе ине Шакир Янбаев. Һуғыш йылдарында шофер булып хеҙмәт итеп, ҡайтҡас ижад итә башлап, бик үҙенсәлекле проза әҫәрҙәре яҙҙы ул. 1976 йылда донъя күргән "Зәңгәр сатыр" тигән романы геологтарҙың ауыр хеҙмәте, коллективтағы мөнәсәбәттәр тураһында. Һис шикһеҙ, әҫәр "Башҡорт китабы топ-100+" акцияһы исемлегенә инергә тейеш", - тип яҙа Ғәлиә Шәмсетдинова.

**"Башҡорт китабы топ-100+" акцияһына ҡушылығыҙ, үҙегеҙ уҡыған башҡорт китаптары/әҫәрҙәре араһынан иң-индәрен һайлап, шулар тураһында редакциябыҙға төбәп хаттар яҙығыҙ. Йәки "Бәйләнештә" социаль селтәрендәге "Киске Өфө" гәзите" төркөмөндә махсус булдырылған "Башҡорт китабы топ-100+" акцияһы" тип аталған фекер алышыу битендә "#башкитап" хештегы ҡуйып, үҙ фекерегеҙҙе белдерегеҙ!**

**Рубриканы Сәриә ҒАРИПОВА алып бара.**

ИНТЕРНЕТТАН



# ТУҠ ТАМАҠ...

## яҡшыраҡ йоҡлата

■ Йыш ҡына матди байлыҡ артынан ҡыуыусылар етеш тормош менән бәхет тә килер, тип өмөтләнә. Тик тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, быңдай кешеләрҙең юғары эш хаҡы түләнгән вазифаларға, уңыштың башҡа атрибуттарына мөмкинлектәре ҙурыраҡ булһа ла, уларҙың барыһы ла бәхетле һәм оҙон ғүмер кисерергә һәләтле түгел. Нотр-Дам университеты эргәһендәге бизнес мәктәбе ғалимдары үткәргән һынауҙарҙа 717 кеше ҡатнашҡан, уларҙы бала саҡтан уҡ күҙәткәндәр. Был кешеләрҙең аҡыл ҡеүәһе юғарыраҡ булыуы сәбәпле, күптәре колледж һәм университеттарҙа ғилми дәрәжә алған, табип йәки профессор сифатында вазифалар биләгән. Араларында урта мәктәпте һәм ҡала колледждарында ғына белем алыусылар ҙа бар. Экспериментта йәшәйештең 5 өлкәһе - эш, ғаилә, ял итеү, сәләмәтлек һәм тормоштан "ҡәнәғәтлек тойоу" баһаланған. Ҡатнашыусыларҙың күбеһе 45 йәштә һәм улар карьераһының иң күтәренке мәле булған. Тикшеренеү авторҙары билдәләүенсә, амбициялы ҡатнашыусылар матди йәһәттән уңышлыраҡ, улар билдәле университеттар тамамлаған, яҡшы эштә эшләгән, юғары эш хаҡы алған. Әммә уларҙың ғүмер оҙайлығы ялҡауҙарҙың ғүмер оҙайлығынан артыҡ түгел. Етмәһә, ҙур теләктәре булып та, мәсәлән, карьера эшләй алмаусылар үҙҙәрен күпкә бәхетһеҙ тойған.

■ Төнгөләккә ашарға ярамай, тип раҫлай бөтөн табиптар ҙа. Тик бына ваҡытында ашап өлгөрмәгәндәргә нимә эшләргә һуң? Төнгә ҡарай ашауҙы зыянһыҙ итергә тырышығыҙ, тип кәңәш бирә диетологтар. Иҫегеҙҙә тотоғоҙ: ас көйөнсә йоҡларға ятыуҙың шулай уҡ кире яҡтары бар. Ғалимдар күптән раҫлаған, тамағы туҡ кеше яҡшыраҡ йоҡлай. Йоҡлар алдынан нимәләр ҡапҡылап алыу ҡандағы шәкәр кимәлен нормаға килтерә. Шулай итеп, һуңға ҡалған киске аш майһыҙландырылған йогурттан тора ала. Унда диетик протеин бар, ул асығыу тойғоһон оҙаҡҡа баҫасаҡ, иң яҡшыһы - йогурт артыҡ татлы булмаһын. Эремсек тә сәләмәт туҡланыу рационынан. Йәшелсәләр шулай уҡ ярайһы ғына туҡлыҡлы ризыҡ, калориялары ла аҙ. Аҡ ит организмдың углевод менән майҙарҙы энергияға әйләндереүен йәйләтә.

■ Бристоль университеты ғалимдары бөгөнгө замандағы йәшәү рәүеше балаларға кире тәьҫир итә, тип белдерә. Һуңғы 16 йылда яман шеш менән ауырыусы йәштәр һаны 40 процентҡа арткан, быға атмосфераға бүленеп сыҡҡан зарарлы матдәләр, пестицидтар, дөрөҫ туҡланмау, радиация "ғәйепле". Британия ғалимдары дәүләт статистикаһын анализлаған һәм илдә 1998 йыл менән сағыштырғанда яман шеш менән сирләүселәр иҫәбе 1300-гә артыҡ икәнен асыҡлаған. Яман шеш бигерәк тә 15 йәшлек үҫмерҙәрҙән алып 24 йәшкә тиклемге йәш кешеләр араһында күп. 1998 йылда 100 мең пациентҡа 10 осраҡ тура килһә, хәҙер был һан 16-ға еткән. Был насар сирҙең артыуын, әлбиттә, медицинала диагностикаһы үҫөн шарттарҙың яҡшырыуы менән дә аңлатып була. Әммә уларҙың барлыҡҡа килеүендә тышҡы факторҙарҙың өлөшө ҙур. Йәштәрҙең сәләмәтлегенә һауаның бысраныуы ныҡ йоғонто яһай, бөгөнгө сирҙәрҙең 40 проценты бысраҡ һауа һуларға мәжбүр булыуҙан килә.

ЕТМЕШ ҺӨНӘРЛЕ...

**Йөрөгән таш шымара, ятҡан таш мүкләнә, ти халҡыбыҙ. Һәр кем йөрөй-йөрөй, ил-йорт күрә-күрә, ут-һыу кисә-кисә тәжрибә туплай. Беҙҙең бөгөнгө геройыбыҙ ҙа Рәсәйҙең төрлө ҡалаларында эшләп, төрлө халыҡтарҙың көнитмешен өйрәнгәндән һуң, тыуған яғына ҡайтып, халыҡ кәсептәренә нигеҙләнгән кейеҙ-быйма баҫыу цехы аса. 2012 йылда Әбйәлил районы үҙәге Аҫҡарҙа быйма, кейеҙ баҫыу цехы асып ебәреп, һатып алыусыларына киң ассортиментлы тауар тәҡдим итеүгә өлгәшкән Йәмил Рафиҡ улы БАЙМЫРҘИН тураһында бөгөнгө һүҙебеҙ. Ул үҙенең уңыштары, быйма, кейеҙ баҫыу эшенең ҡыҙыҡлы, шул уҡ ваҡытта ауырлыҡтары тураһында бәйән итер. Был әңгәмәне уҡығандан һуң уҡыусыбыҙ үҙенә фәнни нигеҙле тәжрибә алыр, тип ышанабыҙ.**

# ҮҘЕБЕҘҘЕҢ КӘСЕПТӘРҘЕ ТЕРГЕҘЕРГӘ КӘРӘК, ТИНЕМ...



➔ **Быйма баҫыу эшенең нескәлектәре тураһында аҙымлап һөйләһәгеҙ, шат булыр инек...**

- Быйма, кейеҙ баҫыу төрки халыҡтарында киң таралған кәсептәрҙең береһе. Ул башҡорттар өсөн дә хас күренеш. Сөнки халҡыбыҙ элек-электән малсылыҡ менән көн күргән. Башҡорттоң ҡуй көтөүҙәренең иге-сиге күренмәгән. Быйма баҫыу төрки халыҡтарында барлыҡҡа килгән шөғөл, тип әйтергә була, сөнки, тарихтан билдәле булыуынса, төрки халыҡтары аяҡтарына кейеҙ туҡымалар урап йөрөр булған. Минең күҙаллауымса, бөгөн билдәле силғау һымаҡ булғандыр ул боронғо аяҡ кейеме. Славян халыҡтары төркиҙәрҙең был асышын камиллаштырыуға өлгәшкән. Улар уралған кейеҙ аяҡ кейемен һыуға манып, аҙаҡ мейестә ҡыҙҙырып, унайлы итеп ҡырҡып, быйма рәүешенә килтергән. Шулай итеп, халыҡтарҙың күп йыллыҡ тәжрибәһенән сығып, беҙ бөгөн белгән быйма барлыҡҡа килгән дә инде.

Шөғөлөбөҙ ниҙән ғибәрәтме? Һарыҡ малының йөнөн ҡырҡып алып, уны йыйып, таҙартып, эшкәртәһең дә, тетәһең. Борон өләсәйҙәр уны ҡул менән тетһә, бөгөн цехтарҙа йөн теткес машина ярҙамға килә. Беҙҙең дә ундай машинабыҙ бар. Тетелгән йөндән быйма "һалабыҙ". Быйма "һалып", килеп сыҡҡан нәмәне өйрәлтеп, эҫе һыуҙа йыуып, уға ҡалып кейҙереп, мейескә тығып, эшкәртеп, таҙартып, ҡырҡып, тигеҙләп сығарһаҡ, әҙер быйма барлыҡҡа килә. Әйткәндәй, йөн ҡырҡҡандан алып мейестән быйма килеп сыҡҡансы биш көн үтеп китә. Бер быймаға биш көнлөк хеҙмәт талап ителә, тимәк. Шуға, быйма баҫыу эше еңелдән түгел ул. Мәшәҡәте күп. Әле мин 5 кенә операцияны һананым. Уларҙың араһында тағы ваҡ әҙерлек эштәре бар.

➔ **Йәмил ағай, быңдай эште башлар өсөн бик аҡыллы баш кәрәктер. Һеҙ был тиклем аҡылды ҡайҙа туплаңығыҙ? Ҡайҙа белем алдығыҙ?**

- Беҙ йылдар үткән һайын аҡыллыраҡ булмайбыҙ - тәжрибәлерәк кенә булабыҙ, тип әйткән бер аҡыл эйәһе. Шул ҡағиҙәнән сығып ҡарағанда, һорауығыҙҙы, бәлки, әлеге уңыштарыбыҙға илтер тәжрибәне ҡайҙан алдығыҙ, тиғән формала биреү урынлыраҡ булыр. Магнитогорск дәүләт тау-техник университеты энергетика факультетының автоматлаштырыу һәм экология бүлегән 2006 йылда тамамлағас, Свердловск өлкәһенә эшкә юлландым. Ошо сәфәрҙән башланды ла инде минең Рәсәйҙең төрлө ҡалалары буйлап күсеп йөрөүем.

СӘЛӘМӘТЛЕК ӘЛИФБАҺЫ

# ҺӨЙӘГЕҢ ҺЫНЫП ҠУЙМАҺЫН!



**Ҡыштың мул ҡарлы булыуы, календарь яҙ етеү менән ҡарлы ямғыр яуыуы, ҡояштың наҙлы ҡарашынан иреп аҡҡан ҡар һыуҙары һәм көндәрҙең саҡ ҡына һыуытыуы юлдарҙа боҙлауыҡ барлыҡҡа килтерҙе. Аяҡ аҫтына ҡарамай иғтибарыңды саҡ ҡына икенсе нәмәгә йүнәлттеңме - тайып ҡолауыңды көт тә тор. Һөҙөмтәлә тап ошондай ваҡытта травмпункттар төрлө кимәлдә йәрәхәт алған йәки ҡул-аяғы һ.б. һынған кешеләр менән тула. Медиктар белдереүенсә, хәҙер халыҡтың ғүмер оҙайлығы арта, ләкин кальций етешмәүҙән һөйәктәр муртая. Һөҙөмтәлә, патологик һыныуҙар күбәйә. Әммә башҡа сирҙәрҙе профилактикалаған кеүек, һөйәктәрҙең ныҡлығын да даими контролдә тоторға, уларҙың һыныуына юл ҡуймаҫҡа ла мөмкиндер бит? Ошо һәм башҡа һорауҙарға Республика медицина профилактикаһы табибы Гөлнур НИҒМАНОВА яуап бирә.**

▸ **Гөлнур Хәмзә ҡыҙы, һуңға ваҡытта бот һөйәге муйынтығы һыныуы йыш осрай. Мәғлүм булыуынса, ундай кешеләр даими тәрбиәгә мохтаж, сөнки түшәккә яталар. Быңдай күренештең сәбәптәре нимәлә?**

- Һөйәк һыныуҙың төп сәбәбе булып остеопороз тора. Статистика мәғлүмәттәре буйынса, 20 секунд һайын ҡайҙалыр кемдеңдер һөйәге һына. 10 йылдан һуң был һан 10 тапҡырға артасаҡ, йәғни кешеләр 10 тапҡырға күберәк зыян күрәсәк. Бот һөйәге муйынтығы һыныуы - иң ауыр күренештер, могайын, сөнки кеше йөрөй алмай, түшәктә ята, оҙаҡ ятыуҙан тән боҙола (тишелә) һәм ошондай сирлеләрҙең һәр дүртенсеһе вафат була. Ысынбарлыҡ бына шундай, һәм остеопороз башланған кешеләрҙең ни бары 35 проценты ғына дауалана. Бөгөн халыҡтың бик аҙы ғына кальций ҡабул итә. Остеопороз - ул һөйәктәрҙең муртайыуы, йәғни улар шул тиклем ыуалыусанға, йомшаҡҡа әйләнә һәм тиҙ генә һына. Хәүеф төркөмөнә, ғәҙәттә, менопаузанан һуң 3-4 йыл үткән, шулай уҡ нәфис, һөйәктәре нескә ҡатын-ҡыҙҙар инә. Ир-аттарҙың ул 30 процентында ғына күҙәтелә.

Космонавтар ергә төшкәс, уларҙы ни өсөн капсуларҙан күтәреп алып сығалар тип уйлайһығыҙ? Сөнки улар йыһанда булған ваҡытта һөйәктәрендәге кальций кәмей. Улар бит атлап йөрөмәй, вакуумда оса, ҡандағы кальций организмға сыға, һөйәктәр муртая һәм ергә төшөү менән аяҡтарына баҫһалар, шунда уҡ барлыҡ һөйәктәр һыныуы мөмкин.

▸ **Остеопорозды үҙаллы нисек билдәләргә мөмкин?**

- Әгәр 30 йәштә бер буйҙа булып, 40 йәштә буйығыҙ кәмене, 70 йәштә бөтөнләй бәләкәсәйеп ҡалдығыҙ икән,

Эшем, хеҙмәтем талап ителгән урындарҙа эшләй-эшләй, бик күп ерле халыҡтар менән аралашырға, уларҙың көнкүрешен өйрәнергә, фекерләү үҙенсәлеген тойомларға форсат тыуҙы. Ошо 6 йыл эсендә үҙ халҡыбыҙҙың көнитмеше, уның бөгөнгөһө, милли традициялары, кәсептәренә нигеҙләнеп, заманса, заман талаптарына тап килерлек эш асыу идеяһын күнелемдә йөрөттөм. Үҙебеҙҙең кәсептәрҙе тергеҙергә кәрәк, тигән ныҡлы ҡарарға килдем.

Халҡыбыҙ борон-борондан ағас һырлау, тимер сүкеү, күн эшкәртеү, кейеҙ баҫыу, балаҫ һуғыу һымаҡ көнкүреш тауарҙарына булған ихтыяжын үҙ көсө менән ҡәнәғәтләндергән. Ағас эшендә оҫталыҡ үрҙәренә артылыусы замандаштарыбыҙҙың бихисап булыуын иҫәпкә алып, ә кейеҙ баҫыу, быйма баҫыу өлкәһе әлегә етерлек кимәлдә үҙләштерелмәүенә баҫым яһап, үҙ эшемде ошо йүнәлеш буйынса башларға булдым. Быйма, кейеҙ баҫыу нескәлектәрен үҙ эшенең оҫталарынан өйрәндем. Уларҙың оҫтаханаларына йөрөнөм, эшен күҙәттем. Ҡайһы бер ағай-апайҙарҙы үҙебеҙгә саҡырып, оҫталыҡ дәрестәре күрһәтеүенә өлгәштем. Кейеҙ, быйма баҫыуҙың заманса инновациялары интернет селтәренән дә өйрәнелде. Шулай итеп, белемде бөртөкләп йыйҙым. Әле лә өйрәнеүҙән туктағаныбыҙ юҡ. Бөгөн дә яңынан-яңы оҫталыҡтар үҙләштереүгә, һөнәребеҙҙе яңы ысулдар менән камиллаштырыуға, эш процесыбыҙҙы тағы ла нығыраҡ ҡулайлаштырыуға көсөбөҙҙө һәм ваҡытыбыҙҙы йәлләмәйбеҙ.

Халыҡтан йөн йыйып, йөндән төрлө-төрлө әйберҙәр: ҡаталар, быймалар, кейеҙҙәр эшләй башланыҡ. Артабан эш күләмебеҙҙе арттырып, кейеҙҙән тирмәләр ҡороуға ла тотоноп киттек. Хәҙер заказға ла эшләйбеҙ тирмәне. Халыҡты юрғандар менән дә тәьмин итәбеҙ. Унан тыш, беҙҙең бик оҫта ҡуллы ҡыҙҙарыбыҙ бар - улар быймаларға матур, күҙ яуын алырлыҡ биҙәктәр сигә, ойоҡбаштар бәйләргә лә өлгөрә. Беҙгә нығыҡ ярҙам итә улар. Бергәләп татыу ғына эшләп, халҡыбыҙҙы тауарҙарыбыҙ менән тәьмин итеп, йәшәп ятҡан көнөбөҙ. Эште ҡулайлаштырыуға, оптималләштереүгә һөнәрем буйынса инженер булыуымдың да ярҙамы тейә.

**➔ Был эштең ауырлыҡтары ла барҙыр бит, уларҙы һеҙ генә, һеҙҙең һымаҡ оҫталар ғына белә. Ниндәй ҡыйынлыҡтар аша үтергә тура килде?**

- Әлбиттә, эшенде яратып башҡарһаң, уның күп нескәлектәрен өйрәнһәң, уның тураһында сәғәттәр буйы һөйләрлек мәғлүмәткә эйә булаһың инде. Минең һымаҡ уҡ, һеҙ ҙә үҙегеҙҙең күнелегеҙгә ятҡан өлкәлә эш башлай алаһығыҙ. Бының өсөн нимә кәрәклеген һеҙ минһеҙ ҙә яҡшы беләһегеҙ. Йәғни, был эште башлар өсөн сыҙап торғоһоҙ теләк кенә кәрәк. Ауырлыҡтарға килгәндә, ҡайһы ғына эште алғанда ла, үҙ ауырлыҡы була инде ул. Беҙҙең эштә күп нәмә ҡул оҫталығына, бармаҡтарыңдың етеҙлегенә, һиҙгерлегенә һәм күнеләндең, кәйефеңдең күтәренке булыуына бәйле. Һуңғыһы барлыҡ хеҙмәткәрҙәр өсөн дә мөһим талаптыр, минеңсә: кәйефең булмаһа, эшең дә бармай. Ошолар, йәғни, оҫта ҡулың, яҡшы кәйефең, яҡты уйҙарың булған саҡта һәм сыҙап торғоһоҙ теләгең бар икән, оҫталыҡ үрҙәренә артыла башларға тәүәккәлләй алаһың.

Һеҙҙе, моғайын, финанс мәсьәләләре лә ҡыҙыҡһындыра торғандыр. Унайҙан файҙаланып, беҙгә үҙ ваҡытында финанс ярҙамы күрһәткән Әбйәлил районы хакимиәтенә оло рәхмәтемде еткерергә теләйем. 2010 йылда йәш эшҡыуарҙарға үҙ эштәрен башлап ебәреү өсөн аҡсалата ярҙам - стартап дәүләт программаһы эшләй башланы. Беҙ ҙә ошо программа сиктәрендә субсидия алдыҡ. Беҙҙән бары тик үҙ эшебеҙҙе башлап ебәреү өсөн кәрәк булған ҡорамалдар исемлеген төҙөү, аҙаҡ, ҡорамалдар һатып алынғас, дәүләткә улар тураһында отчет биреү генә талап ителде. Беҙ, мәҫәлән, был эшкә 100 мең һум һалһаҡ, дәүләт тә шундай уҡ суммала ярҙам итте. Дөйөмләштереп, ябайлаштырып әйткәндә, шулай.

**➔ Сеймал тураһында ла әйтеп китеү урынлы булыр...**

- Беҙҙең район элек-электән малсылыҡ өстөнлөк иткән райондарҙың береһе булды. Шунлыҡтан, әлеге көндә иҡтисади хәлдең, ауыл хужалығының ниндәй хәлдә булыуына ҡарамаҫтан, беҙҙең районда 30 меңдән ашыу һарыҡ малы иҫәпләнә. Һәр һарыҡтан, яҡынса әйткәндә, 500 граммдан 1 килограммға тиклем йөн ҡырҡып алыу мөмкинлеген иҫәпкә алғанда, йылына беҙҙең районда яҡынса 30 мең килоға яҡын сеймал әҙерләнә, тип әйтергә була. Әлбиттә, беҙ үҙебеҙҙән ҙур булмаған цехыбыҙҙа бөтөн был күләмде үҙләштереп, эшкәртеп өлгөрә алмайбыҙ. Беҙгә уның 4 тоннаһы ла етә. Ҡалған сеймал сит өлкәләргә, сит райондарға тарала. Был районыбыҙҙың етештереү ҡеүәте тураһында һөйләй.

**➔ Конкурентлыҡ ҡамасауламаймы эшегеҙгә?**

- Кейеҙ, быйма баҫыусылар республикала, илдә беҙ генә түгел икәне һәр кемгә мәғлүм. Беҙҙең районда ла, күрше райондарҙа ла кейеҙ, быйма баҫыусы коллегаларыбыҙ бар. Улар менән беҙ тығыҙ хеҙмәттәшлек итәбеҙ һәм сама менән ярышабыҙ. Хаҡты кәметеп, күршеләрҙе "батырырға" тигән уй башыбыҙға ла инеп сыҡмай. Күмәртәләп алыусыларға ташламалы хаҡ менән тауар оҙатһаҡ та, ваҡлап алыусы клиенттарыбыҙға күршеләребеҙ, коллегаларыбыҙ ҡуйған хаҡ менән һатабыҙ тауарҙы. Конкуренттарҙы "батырайым", үҙ өҫтөнлөгөмдө булдырайым, тигән маҡсат менән эшләгән хәлдә, ундай "эшҡыуарҙар" йыш осраҡта уңышһыҙлыҡҡа дусар була - үҙе "бата". Миңә ҡалһа, халыҡ кәсептәре менән шөғөлләнгән эшҡыуарҙар бер-береһен аяп, коллегалары менән хеҙмәттәшлек итеп эшләргә бурыслы, беҙ шулай эшләйбеҙ ҙә. Мәҫәлән, беребеҙҙең ниндәйҙер ҡорамалы ватылһа, икенсебеҙгә ярҙам һорап барабыҙ бит. Коллегалар Учалы, Баймаҡ, Сибай, Магнитогорск, Силәбе ҡалаларында һәм беҙҙең районда ла бар. Һәр ҡайһыһының үҙенең генә өҫтөнлөк биргән тауары бар. Кемдер, мәҫәлән, быйма баҫыуға махсуслаша, кемдер кейеҙ эшләүгә, ә бәғзе берәү йөн иләп, ойоҡбаштар бәйләп, һатыуға сығара. Йәғни, бер кем дә күршеһенә ҡамасауламай. Беҙ иһә, универсаллеккә йөҙ борғанбыҙ. Әҙ-әҙләп, төрлө тауар етештерәбеҙ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**
**Йәмил Рафиҡ улы Баймырҙин һымаҡ эшлекле, фекерле, ғәмле, кешелекле замандаштарыбыҙ күберәк булһа ине, тигән теләктә әңгәмәне йомғаҡлайбыҙ. Уҡыусылар үҙҙәренә кәрәкле һығымтаны үҙе яһағандыр, тигән ышаныста ҡалабыҙ.**

**Илгиз ИШБУЛАТОВ**
**әңгәмәләште.**

тимәк, организмда остеопороз процесы бара. Ҡулбаш, муйын йәки бил тирәһе ауыртҡанда ла табипҡа мөрәжәғәт итергә кәрәк, был да остеопороз билдәһе булыуы мөмкин.

Ғәҙәттә, ҡул суғы эргәһендәге ҡуш һөйәк һындырыусылар күп. Был урын бик ауыр төҙәлә. Күпмелер ваҡыт гипс менән йөрөргә тура килә, тикшерелергә рентгенға килгәс, унда һөйәктәр тоташмағаны асыҡлана. Умыртҡа һөйәге лә ыуалыусанға әйләнә, уның һыныуы ла бот һөйәге муйынтығы һыныуы кеүек уҡ ҡурҡыныс.

**▸ Ниндәй аҙыҡ-түлектә кальций күп? Организмды кальций менән тулыландырыу өсөн нимә эшләргә кәрәк?**

- Ҡайһы бер пациенттар килә лә, беҙ һөт эсәбеҙ, һөт продукттары менән туҡланабыҙ, ти. Бәләкәй саҡта ашҡаҙанда һөт продукттарын тарҡата торған махсус ферменттар була. Ваҡыт үтеү менән ашҡаҙандың лайлалы тиресәһе үҫешә, был ферментты эшләп етештерә алмай башлай. Шуға күрә, күптәр һөт эсһә, эсәктәре менән проблема килеп тыуыуы ихтимал. Шул уҡ ваҡытта ашҡаҙандың лайлалы тиресәһе атрофияланып, кальцийҙы үҙләштермәүе лә мөмкин. Шулай уҡ йомортҡа тышын төйөп ашаусылар ҙа бар. Ләкин ул да ярҙам итмәй.

Кальций һөйәге менән бергә ҡаҡланған балыҡта күп. Миндаль, һөйәкле сардина балығы, ҡаты сортлы сыр, аҡ күсәнле кәбеҫтә кальцийға бай.

**▸ Һөйәктәрҙә кальций кәмегәнән нисек тикшерергә була?**

- Ҡан анализын тапшырып, ҡандағы кальций күләмен белергә мөмкин. Шулай уҡ денситометр тигән аппарат та бар, ул һөйәктең тығыҙлығын асыҡлай. Ғөмүмән, аппараттар күп, улар һөйәктәрҙең торошо ниндәй кимәлдә икәнен аныҡ билдәләй.

Тағы шуны әйтер инем: остеопорозды иҫкәртеү күпкә еңелерәк. Бының өсөн бары тик тейешле препараттар эсергә кәрәк. Ләкин бында шуны белеү зарур: кальций препаратының үҙен генә эсеү - аҡсаңды елгә осороу менән бәрәбәр. Кальцийҙы бары тик уны организмда нығытып ҡуйыусы препарат менән бергә эскәндә генә файҙа буласаҡ.

Шулай уҡ әүҙем хәрәкәтләнеү мотлаҡ. Нисә йәштә булыуығыҙға ҡарамаҫтан, хатта оло йәштәге пенсионер булһағыҙ ҙа - хәрәкәтләнегеҙ. Ҡытайҙа бик нығыҡ ҡарттар ҙа ҡыбырлап йөрөргә тырыша, беҙгә лә уларҙан өлгө алырға кәрәк. Юҡҡа ғына, хәрәкәттә - бәрәкәт, тимәйҙәр бит.

**▸ Остеопорозды нисек булдырмаҫҡа?**

- Профилактика өсөн, әлбиттә, кальций ҡулланырға, алкоголле эсемлектәр менән мауыкмаҫҡа, сәләмәт тормош алып барырға кәрәк, сөнки кире ғәҙәттәр дөйөм сәләмәтлеккә кире йоғонто яһай. Скандинавия илдәрендә: Швейцарияла, Финляндияла, Швецияла, Исландияла, Ирландияла күптәр ошо сирҙән яфалана. Уларҙа махсус остеопороз мәктәптәре эшләй. Унда йөрөүселәргә нисек туҡланырға, һөйәк һынмаһын өсөн үҙеңде нисек торорға кәрәклеген аңлаталар. Беҙҙә был эш әле саҡ башланып тора.

**Земфира ХӘБИРОВА әҙерләне.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ЕҢЕЛ ЙӘШӘ!

## Шундай ун ҡанун:

1. Беҙ был донъяға һабаҡ алырға килгәнбеҙ, ә уҡытыусыһы - тормош үҙе.
2. Йыһандың айырып яратҡан йәндәре юҡ.
3. Тормошобоҙ - инаныуҙарыбыҙ сағылышы.
4. Әйбергә, кешеләргә, аҡсаға бәйлелек барлыҡҡа килеү менән тормош кирегә тәгәрәй башлай.
5. Иғтибарыңды нимәгә туплайһың, шул үҫешә һәм арта.
6. Йөрәгең ҡушыуы буйынса йәшә!
7. Аллаһы Тәғәлә бер ваҡытта ла һинең эргәнә килеп: "Хәҙер мин һиңә уңыш ҡаҙанырға рөхсәт итәм!" - тип әйтмәйәсәк.
8. Тормош менән көрәшә башлаһаң, ул һәр ваҡыт еңеүсе булып сыға.
9. Кешеләрҙе нисек яратырға? Бары тик уларҙы барлыҡ кире һәм ыңғай яҡтары менән ҡабул итергә өйрәнегеҙ.
10. Тормошобоҙҙоң маҡсаты тирә-яҡ мөхитте үҙгәртеү түгел, ә үҙебеҙгә үҙгәреү.

## Беҙ был донъяла тормош биргән барлыҡ һабаҡтарҙы ятлау өсөн йәшәйбеҙ

**Һабаҡты үҙләштермәйбеҙ икән, уны ҡабат-ҡабат уҡырға тура килә. Ниһайәт, үҙләштерәбеҙ икән, тормош икенсеһен ташлай. Был һабаҡтар бер ваҡытта ла тамамланмай!**

Миңә 10 йәш булғанда, иң ҡиммәтле әйберем футбол тубы ине. Унан ашағанда ла, йоҡлағанда ла айырылманым, аҙнаһына бер тапҡыр, аяҡ кейемем урынына уны ялтыратҡансы таҙарта инем. Футбол тураһында бөтөн нәмәне белдем, әммә тормоштоң башҡа өлкәләрендә, мәҫәлән, балаларҙың нисек тыуғаны хаҡындағы мәғлүмәттә һай йөҙҙөм. Бер ваҡыт, урамда уйнағанда, тубымды юғалттым. Тирә-яҡты ентекләп эҙләп сыҡтым, тапмағас, уны кемдер урлаған, тигән һығымтаға килдем.

Күпмелер ваҡыттан һуң бер ҡатынды осраттым, ул кейеме аҫтына минең тубымды йәшергәйне. Мин ныҡлы баҫып уның эргәһенә килдем һәм ҡәтғи тауыш менән: "Ни өсөн һеҙ минең тубымды кейемегеҙ аҫтына тығып йәшерҙегеҙ?" - тип һораным. Әлбиттә, унда минең тубым юҡ ине... Әммә тап ошо көндә мин балалар нисек тыуғанын һәм ауырлы ҡатын-ҡыҙ туғыҙынсы айында нисек булғанын аңланым. Тубымды һуңыраҡ таптым. Ләкин ул ваҡытта шуныһы аптыратты: нисек мин, 10 йәшемә еткәнсе, быға бер тапҡыр ҙа ауырлы ҡатындарға иғтибар итмәгәнмен... Һәм ни өсөн ошо ваҡиғанан һуң улар миңә аҙым һайын осрай башланы? Ҡыҫҡаһы, тормошта яңы мәғлүмәтте ҡабул итеү өсөн өлгөрөп етәбеҙ. Шуға тиклем хатта танау аҫтындағы ваҡиғаларҙы ла белмәүебеҙ мөмкин.

**Ни өсөн беҙгә бәләләр һәм бәхетһеҙлектәр бирелә?** Күптәребеҙ тормош яҡшы ғына итеп килтереп тондормай тороп, бер ниндәй ҙә һығымта яһамай. Ни өсөн? Сөнки үҙгәрмәү уңайлыраҡ. Миҫалға һаулығыбыҙҙы ғына алайыҡ. Ҡасан туҡланыу рационын үҙгәртеп, физкультура менән шөғөлләнә башлайбыҙ? Тәнебеҙ өләштәргә тарҡала, табип: "Тормош рәүешен үҙгәртмәһәгеҙ, мотлаҡ үләсәкһегеҙ!" - тигәс кенә мотивация барлыҡҡа килә. Ә шәхси мөнәсәбәттәрҙә? Партнерыбыҙға ҡасан уның беҙҙең өсөн бик ҡәҙерле икәнен әйтәбеҙ? Никах тарҡалыу алдында, ғаилә тормошо селпәрәмә килгәс кенә.

**Эндрю МЭТЬЮЗ.**

## СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ

# ҠУРСАҠТАР БАЙРАМЫ

**Ошо көндәрҙә Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры 85 йыллыҡ юбилейын билдәләне.**

Ҡурсаҡ театры 1932 йылдың 5 февралендә эшләй башлай, ул саҡта Өфө сәнғәт һарайының Бәләкәй залында (хәҙер Башҡорт дәүләт опера һәм балет театры) тамашасылар театр директоры һәм режиссеры Мария Елгаштина етәкселегендә "Шалҡан" исемле тәүге спектаклде ҡарай.

Был көндә театр актерҙары сағыу тамашалар - тематик номерҙар, спектаклдәрҙән өҙөктәр күрһәтте. Улар иҫәбендә "Һиндостан легендаһы" спектакле лә бар. Башҡорт ҡурсаҡ театры 1988 йылда Һиндостанда гастролдәр ваҡытында ошо спектакль өсөн Джавахарлал Неру исемендәге халыҡ-ара премияға лайыҡ була. Театр артистары һәм хеҙмәткәрҙәре Башҡортостан Мәҙәниәт министрлығы, Өфө хакимиәте, республика Театр эшмәкәрҙәре союзының рәхмәт хаттары менән билдәләнде. Республиканың халыҡ артисы Миңлеғаян Сафинаға "Башҡортостан Театр эшмәкәрҙәре союзының театр сәнғәтен үҫтереүгә индергән өлөшө өсөн" К.С. Станиславский миҙалы тапшырылды.

-Бөгөн театрҙа оҫталар ғына түгел, үҙ эшенә мөкиббән киткән, балалар күңеленә яҡтылыҡ өләшкән тылсымсылар эшләй. Актерҙарыбыҙ сабый күҙҙәре менән донъяға баға, һәр нәмәгә шатлана, кескәй асыштар яһай һәм яңыһына һоҡлана белә, - тип билдәләне Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры директоры Альберт Имаметдинов.

# ТЕАТР ЯҘЫ

**Өфө матур мәҙәни сараға - "Театр яҙы"на әҙерләнә. Республика фестивале М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрында 20-26 апрелдә үтәсәк. Проект Башҡортостан Башлығы грантына лайыҡ булғайны.**

Фестивалдә республиканың бөтөн дәүләт театрҙары ҡатнашасаҡ. Спектаклдәр Өфөлә бер нисә майҙанда күрһәтеләсәк. Беренсе тапҡыр конкурс программаһында "Салауат Юлаев" спектакле менән Башҡорт опера һәм балет театры ҡатнаша. Заманса режиссура һәм драматургия үҙәге вербатим - документаль театр жанрында "Беҙҙекеләр" тигән спектакль тәҡдим итәсәк. Фестивалдең төп маҡсаты - республиканың театр сәнғәтен һаҡлау һәм үҫтереү, ижадта яңы йүнәлештәр асыҡлау, театрҙарҙың үҙара бәйләнешен нығытыу, шулай уҡ актерҙарҙы, рәссамдарҙы, режиссерҙарҙы, тәнҡитселәрҙе берләштереү. Өфө был фестивалде өсөнсө тапҡыр ҡабул итә, ул шулай уҡ Салауат һәм Стәрлетамаҡ ҡалаларында ла үткәне бар.

# ЗӨЛӘЙХАНЫҢ ЯҘМЫШЫ

**М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры "Зөләйха күҙҙәрен аса" романы буйынса эш башлай. Әлеге мәлдә Рәсәйҙә билдәле драматург Ярослава Пулинович уның инсценировкаһын яҙып бөткән. Уны башҡортсаға Хөрмәтулла Үтәшев тәржемә итәсәк.**

Гүзәл Яхина романы буйынса сәхнә әҫәрен режиссер Айрат Абушахманов ҡуясаҡ. Автор 2016 йылдың декабрендә Өфөгә килеп киткәйне, ул унда Айрат Абушахмановтың ижадына ихтирам менән ҡарауын белдергәйне. Яҙыусы театр актерҙары менән дә осрашты, уларҙың һорауҙарына яуап бирҙе. "Зөләйха күҙҙәрен аса" спектакле премьераһы киләһе миҙгелдә көтөлә. Гүзәл Яхинаның китабы XX быуаттың 30-сы йылдары тураһында һөйләй. Әҫәр әлеге көндә донъяның 20 теленә тәржемә ителгән. Романдың авторы "Большая книга" һәм "Ясная Поляна" әҙәби премиялары лауреаты. Ошо уҡ роман буйынса "Рәсәй" каналы 6 сериялы фильм әҙерләй. Зөләйханың театраль яҙмышы башҡорт сәхнәһендә башланасаҡ.

# СӘХНӘЛӘ - СТУДЕНТТАР



**Башҡортостандың юғары уҡыу йорттарында 25-се "Студент яҙы" фестивале башлана. Студенттар өсөн был фестиваль - үҙҙәрен, ижадтарын һәм тормошҡа ҡарашын күрһәтеү мөмкинлеге.**

Ул иң тәүҙә факультеттарҙа уҙа, артабан иң яҡшы номерҙар дөйөм юғары уҡыу йорто гала-концертына һайлап алына һәм һуңынан ғына жюри кемдәр дөйөм республика йомғаҡлау концертында сығыш яһаясағын иғлан итә. Башҡорт дәүләт университетында фестивалде 27 мартта филология факультеты аса. Конкурс марафоны 3 апрелдә университеттың физика-техник институты студенттарының сығышы менән тамамлана, тип хәбәр иттеләр юғары уҡыу йортоноң матбуғат үҙәгендә. "Быйыл командаларҙың сығыштары өсөн тема ирекле, - тип һөйләне Башҡорт дәүләт университетының Студенттар клубы директоры һәм режиссеры Розалия Таһирова. - Йәштәр университет, студент тормошона ла, шулай уҡ экология темаһына ла мөрәжәғәт итә ала, сөнки быйыл - Рәсәйҙә һәм Башҡортостанда Экология һәм айырым һаҡлауға алынған биләмәләр йылы".

# "БАБИЧ" ЭКРАНҒА СЫҒА



**Башҡортостанда "Бабич" тарихи нәфис фильмы прокатҡа сыға. Фильмдың премьераһы 19 апрелдә "Родина" кинотеатрында үтә. Республика буйлап прокат апрель-май айҙарына тәғәйенләнгән.**

"Родина" кинотеатрында уны көндөҙ һәм киске 7-лә күрһәтәсәктәр. Әлеге көндә "Тере Лента" кинокомпанияһында фильм өҫтөндә эш тамамланып тора. Башҡорт шағиры һәм йәмәғәт эшмәкәре Шәйехзада Бабичтың яҙмышы тураһында ул. Ул 1919 йылда Рәсәй тарихында беренсе автономиялы республика барлыҡҡа килеүҙә әүҙем ҡатнаша. Фильм Башҡортостан Башлығы гранты һәм Мәҙәниәт министрлығы, шулай уҡ бағыусылар ярҙамында төшөрөлә.

Төп ролде М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры актеры Илгиз Таһиров башҡара. Проектта шулай уҡ республиканың башҡа мәҙәни усаҡтары хеҙмәткәрҙәре лә күпләп ҡатнаша. Театрҙар һәм музейҙар реквизиттар, декорациялар менән ярҙам итә. Хәрби-тарихи патриотик клубтар, шул иҫәптән "1-се Башҡорт атлы полкы", "190-сы Очаков полкы", "Росстань" шул замандағы Өфөнө киренән тергеҙеүгә ҙур булышлыҡ итә. Фильмда 80-дән ашыу актер ҡатнаша. 50-нән ашыу декорация ҡорола, компьютер графикаһы менән 200 кадр эшләнә, Өфө, Троицк, Ырымбур, Силәбе, башҡа ҡала һәм ауылдарҙың тышҡы йөҙө тергеҙелә. Төп ролдәрҙә шулай уҡ Рәмзил Сәлмәнов, Радмир Абдуллин, Риф Сәйфуллин, Зөлфәр Әхмәтов, Алина Ғәлиева, Руслан Хайсаров, Артур Ишмөхәмәтов уйнай. Фильмдың режиссер-ҡуйыусыһы - Булат Йосопов.

# КЕМ ИҢ ОҪТАҺЫ?



**Башҡортостанда "Батырҙар иле-2017" Балалар һәм үҫмерҙәр ижады республика асыҡ конкурсы үтә. Конкурсҡа "Урал батыр" эпосы, башҡорт халыҡ әкиәттәре, легендалары, риүәйәттәре, эпостары, башҡорт милли йолалары, фольклоры темаһына эштәр ҡабул ителә.**

Бәйгелә урта дөйөм белем биреү һәм художество мәктәптәре, балалар ижад йорттары, йәш техниктар станциялары уҡыусылары, урта һәм юғары уҡыу йорто студенттары ҡатнаша ала. Номинациялар: живопись (акварель, гуашь, акрил, майлы буяу), графика (ҡәләм, тушь, йомшаҡ материалдар, линогравюра, офорт, компьютер графикаһы), скульптура (балсыҡ, керамика, заманса материалдар), ағастан һырлап эшләү, биҙәү-ҡулланма сәнғәте (гобелен, туҡыу, ҡорама ҡорау, кейеҙ баҫыу, ҡайын туҙы). Еңеүселәрҙе билдәләү көнө - 12 апрель. Ғаризалар 27 мартҡа тиклем түбәндәге адрес буйынса ҡабул ителә: 453837, БР, Сибай ҡалаһы, Белов урамы, 36/1. "Сибай балалар художество мәктәбе". Электрон почта: sibhudskola@mail.ru.

# ЕҢЕҮГӘ ӨМӨТЛӘНӘБЕҘ



**Әле Мәскәүҙә бөтә театр сәнғәте төрҙәре буйынса "Алтын битлек" 23-сө иң яҡшы Рәсәй спектаклдәре фестивале бара. Ул 18 апрелгә ҡәҙәр дауам итәсәк.**

Унда былтырғы миҙгелдәге иң яҡшы спектаклдәр менән Башҡортостандың ике театры ҡатнаша. Фестиваль программаһында баш ҡала тамашасылары, "Алтын битлек" Рәсәй милли театр премияһында ҡатнашыусылар һәм жюри ағзалары М. Ғафури исемендәге Башҡорт драма театры ҡуйылышында "Джут" спектаклен ҡараны. Спектакль Европаның режиссерлыҡ традицияларында, сәхнәләрҙе һәм ысынбарлыҡты көсәйеү ысулы менән ҡуйылған. Пьеса фестивалдең конкурстан тыш "Битлек Плюс" программаһында күрһәтеләсәк. Ә 13 һәм 15 апрелдә Башҡорт опера һәм балет театры артистары "Яңы опера" һәм "Геликон-опера" театрҙары сәхнәһендә ике спектакль - "Геракл" һәм "Орлеан ҡыҙы" спектаклдәрен ҡуя. Улар бер нисә номинацияларҙа еңеүгә дәғүә итә.

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1438 һижри йыл.*

| Март - Апрель (Йомадиәл ахыр - Рәжәб) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 27 (28) дүшәмбе | 5:32 | 7:02 | 13:30 | 18:11 | 19:41 | 21:11 |
| 28 (29) шишәмбе | 5:30 | 7:00 | 13:30 | 18:13 | 19:43 | 21:13 |
| 29 (1) шаршамбы | 5:27 | 6:57 | 13:30 | 18:15 | 19:45 | 21:15 |
| 30 (2) кесе йома | 5:25 | 6:55 | 13:30 | 18:17 | 19:47 | 21:17 |
| 31 (3) йома | 5:22 | 6:52 | 13:30 | 18:19 | 19:49 | 21:19 |
| 1 (4) шәмбе | 5:20 | 6:50 | 13:30 | 18:21 | 19:51 | 21:21 |
| 2 (5) йәкшәмбе | 5:17 | 6:47 | 13:30 | 18:23 | 19:53 | 21:23 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

## СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**25 март "Һөйәһеңме, һөймәйһеңме?"** (Ф. Бүләков), трагикомедия 12+
**26 март "Ҡоҙаса"** (Б. Бикбай, З. Исмәғилев), музыкаль комедия 12+
**28 март "Бәхет хаҡы"** (Х. Мөҙәрисова), музыкаль мелодрама 16+
**29 март "Нәркәс"** (И. Йомағолов), мелоромантик трагедия 12+
**30 март "Мин һинең ҡәйнәң булам"** (С. Белов), комедия 12+
**31 март "Йүгер, Харис, йүгер..."** (Э. Йәнһүҙин), комедия 16+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**28 март "Йәләлетдин атай"** (М. Кәрим), уйланыу 12+
**29 март "Карт кейәүҙәр, йәки Шомбай ҡоҙа"** (Ф. Бүләков), фольклор комедия 6+
**31 март "Ханума"** (А. Цигарели), музыкаль комедия 12+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**25 март "Слоненок"** (Р. Киплинг). Башлана 12.00, 14.00 0+
**25 март "Тысяча и одна ночь"** (П. Васильев). Башлана 19.00 16+
**26 март "Три поросенка"** (С. Михалков). Башлана 12.00, 14.00 0+

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**25 март "Ғәлиәбаныу"** (М. Фәйзи), музыкаль драма 16+
**30 март "Елкендерһен күңелдәрҙе бейеү ялҡыны"** Бейеү театры 6+
**31 март "Күңелле йәшәйбеҙ"** (Н. Ғәйетбаев), комедия 12+

### Салауат дәүләт башҡорт драма театры

25 март "Три поросенка" (З. Сөләймәнов), әкиәт. Башлана 12.00 0+

ҮӘТ, ШӘПТӘР!

# МӘРГӘНДӘР СЫҠТЫ АЛЫШҠА...









**Ысын башҡортто атһыҙ, уҡ-һаҙаҡһыҙ күҙ алдына ла килтереп булмаҫ ине. Ат әле лә уның ҡанаты, тоғро юлдашы булып ҡала килә, ә бына онотола яҙып барған уҡ-һаҙаҡ традицияһын тергеҙеп, егеттәребеҙ бик маҡтаулы, изге эш башлап ебәрҙе.**

"Любизар" 1-се Башҡорт атлы полкы хәрби-тарихи клубы башланғысы менән ойошторолған "Мәргән уҡсы" фестивале йәштәр араһында иҫ киткес популярлыҡ яуланы. Һуңғы араларҙа ғына ла ошо фестиваль сиктәрендә бер нисә тапҡыр уҡ атыу бәйгеһе булып алды. Шундай ярыштарҙың сираттағыһы, Ҡарас сәсәнгә арналғаны, ошо көндәрҙә генә Учалы районының Уральск ҡасабаһында үтте. Унда Учалы, Әбйәлил, Ғафури, Бөрйән, Хәйбулла районларынан, Сибай һәм Өфө ҡалаларынан, Силәбе өлкәһенән 50-нән ашыу мәргән ҡатнашты. Ир-егеттәр - 27 һәм 25, ә ҡатын-ҡыҙҙар 20 һәм 15 метр алыҫлыҡтан сәптәргә атты.

Әйткәндәй, шуныһы ҡыуаныслы: ир-егеттәр менән бер ҡатарҙан мәргәндәр бәйгеһендә ҡатын-ҡыҙҙар ҙа уҡ ата. Матур күренеш, ләкин быға ғәжәпләнергә түгел: халҡыбыҙ тарихынан белеүебеҙсә, ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ саялыҡта ир-егеттәрҙән бер ҙә ҡалышмаған: атта ла сапҡан, яуҙа ла ҡатнашҡан, мәргән уҡсы ла булған. Тап ана шул сифаттарҙың бөгөнгә ҡәҙәр аңыбыҙға ла, ҡаныбыҙға ла һеңеп ҡалғанлығын, ләкин уны "уятырға" бер ҡасан да һуң булмауын иҫбат итә лә инде ҡыҙҙарыбыҙ. Улар араһында байтаҡ мәрәй йыйыуға өлгәшкән һәм, күп егеттәрҙең "үксәһенә баҫып", финалға сығыусы ун ике кеше араһында берҙәнбер гүзәл зат - юрматы һылыуы, "Киске Өфө" гәзите хеҙмәткәре **Алһыу Кинйәбаеваның** (аҫҡы фотола һулда) булыуы бөтәбеҙ өсөн дә ҡыуаныс һәм ғорурлыҡ булды. Ә шулай ҙа был милли спорт төрөнөң тағы ла күберәк егеттәребеҙ йөрәген ҡуҙғытыуын, сәм уятыуын теләйек.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# ҺЫЛЫУҘАРЫБЫҘ БӘЙГЕ ТОТА...

## Өфөлә һәм...



**Өфөлә "Һылыуҡай-2017" республика телевизион гүзәллек бәйгеһендә Гран-при яулаусы ҡыҙҙың исемен иғлан иттеләр. Ул - Өфөнән Земфира Байдәүләтова. Республиканың тәүге һылыуҡайы шығы таж менән бүләкләнде.**

Конкурстың финалына йәмғеһе 16 ҡыҙ сыҡты. Ҡаҙандан Ынйы Иҙелбаева беренсе урын яуланы. Икенсе урынды Ырымбурҙан Зилиә Агишева һәм Балтас районынан Юлиана Әмирйәнова бүлеште. Өсөнсө урын бер юлы өс ҡатнашыусыға - Нефтекаманан Алина Ғилмәтовага, Салауат районынан Диана Шәғәйеповаға һәм Белорет районынан Әҙилә Әлибаеваға тейҙе. Финалсыларҙың хеҙмәте конкурс бағыусыларының махсус бүләктәре - Каппадокияға (Төркиә) юлламалар, ювелир биҙәүестәр, күн әйберҙәр менән баһаланды.

"Һылыуҡай" республика конкурсы - Рәсәйҙә оҙаҡ һәм бай тарихҡа эйә булған берҙән-бер милли заманса проект. Ойоштороусылары - Мәҙәниәт министрлығы, Республика халыҡ ижады үҙәге һәм "Туған тел" музыкаль-күңел асыу телеканалы.

## ...Мәскәүҙә



**Мәскәүҙә "Мәскәүҙең башҡорт һылыуҡайы" матурлыҡ бәйгеһенең финалы булып үтте. М. Ломоносов исемендәге Мәскәү дәүләт университетын тамамлаусы, Мәскәү физика-техник институты магистранты Азалия Заһитова Гран-при яуланы.**

Финалда йәмғеһе Башҡортостандан һигеҙ ҡыҙ ҡатнашты. Улар бөтәһе лә Мәскәүҙең алдынғы университет студенттары. Финалда төп конкурс этаптары - башҡорт костюмдарында дефиле, башҡорт халыҡ йырҙарын башҡарыу, таланттар бәйгеһе һәм үҙең менән таныштырыу. Жюриҙы Рәсәй Федерацияһы Дәүләт Думаһы депутаты Инга Йомашева етәкләне. Конкурс Мәскәүҙә һәм Санкт-Петербургта Башҡортостан студенттары һәм аспиранттары ассоциацияһы тарафынан Рәсәй Федерацияһы Президенты ҡарамағындағы Тулы хоҡуҡлы илселеге булышлығында уҙғарылды.

- Башҡортостан йәштәре Мәскәүҙә республиканың ыңғай имиджын булдырыуға йүнәлтелгән юғары кимәлдәге үҙойошҡанлыҡ кимәлен күрһәтә. Нәҡ шуның өсөн ижади коллективтарҙың профессиональ кимәлен күтәрергә, уларға төрлө яҡтан ярҙам итергә, шул иҫәптән уларҙың сәхнә реквизиттарын байытырға кәрәк, сөнки был коллективтарҙың сығышы буйынса тәү сиратта Рәсәйҙең баш ҡалаһында республика халыҡтарының менталитеты һәм мәҙәниәте хаҡында фекер барлыҡҡа килә, - тип һөйләне сара бағыусыларының береһе булып сығыш яһаусы Дәүләт Думаһы депутаты Рәмзил Ишһарин.

Шулай итеп, бәйгелә беренсе урын - Мәскәү нескә химик технологиялар институты студенты Сөмбөл Лоҡманова. Ҡыҙ шулай уҡ махсус номинацияла бүләкләнде һәм Башҡортостандан "Донъя гүзәле - 2017" халыҡ-ара матурлыҡ бәйгеһендә ҡатнашыу хөрмәтенә лайыҡ булды. Мәскәү иретмә һәм ҡорос институты студенты Ләйсән Зиннурова икенсе урын яуланы. Ләйсән Башҡортостандан "Мисс Азия. Рәсәй 2017" бөтә Рәсәй гүзәллек бәйгеһендә ҡатнашасаҡ. Әлфинә Әхмәтова (Мәскәү авиация институты) өсөнсө урынға лайыҡ булды.

- Мәскәүҙә лә башҡорт ҡыҙҙары милли гүзәллек бәйгеһендә ҡатнаша, үҙ потенциалын аса алыуы ысынлап та бик шәп. Конкурс миңә тағы ла күберәк ышаныс өҫтәне, милли үҙаңымды нығытты, - тип, тәьҫораттары менән уртаҡлашты бәйге еңеүсеһе Азалия Заһитова.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# КЕШЕ АРБАҺЫНА УЛТЫРМА,

## ултырһаң - үкенмә

Яҡшы ағай ил көтһә, йорт кәрәген үтенер, яман ағай ил көтһә, илгә дошман килтерер.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле)**

Поликлиника - ул ауырыуҙар араһында тәжрибә уртаҡлашыу буйынса тиҙләтелгән курстар.

**(Сильвия Чиз).**

Элек ҡайһы берәүҙәр мемуарҙар яҙып, йәшәү өсөн аҡса эшләгән. Хәҙер иһә мемуарҙар яҙып баҫтырыу менән янап, тағы ла күберәк аҡса эшләүселәр бар.

**(Питер Устинов).**

Үс алыу - ул үҙеңде тешләгән этте тешләү менән бер.

**(Остин О,Малли).**

Доға уҡығанда беҙ һәр ваҡыт Аллаһы Тәғәләнән донъяны үҙгәртеүҙе һорайбыҙ, ә үҙебеҙҙе үҙгәртеү тураһында һорарға онотабыҙ.

**(Франсуа Мориак).**

Ахмаҡлыҡ эшләргә ҡурҡмаған кеше һаман йәш әле.

**(Петр Капица).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Беҙҙең эраға тиклем 334 йылда Александр Македонскийҙың флоты Финикия ярҙарына килеп туҡтай. Бына-бына иң ауыһыҙ алыштарҙың береһенә инергә тейеш була улар. Ярға килеп терәлгәс, полководец дошмандың уларға ҡарағанда өс тапҡырға күберәк булғанын күрә. Александрҙың һәр ваҡыт тоғро батыр яугирҙары быны күреп тетрәнә, еңеүгә ышанысын юғалта. Еңелмәҫ ғәскәр ҡурҡыу алдында ҡала. Александр Македонский бар яугирҙарын дошман ярына төшөрөп бөткәс, карабләрҙе яндырырға бойороҡ бирә. Шунан һалдаттарҙы йыйып ала ла, былай ти: "Күрәһегеҙме, беҙҙең карабләр яна! Беҙ еңелһәк, өйҙәребеҙгә ҡайта алмаясаҡбыҙ һәм ғаиләләребеҙҙе күрә алмаясаҡбыҙ, мәңгелеккә ошо ерҙә йәшәргә мәжбүр буласаҡбыҙ. Тимәк, беҙ еңергә һәм дошмандарҙың карабләрендә өйҙәребеҙгә ҡайтырға тейешбеҙ!" Ул алышта Александр Македонскийҙың бәләкәй ғәскәре бик ҙур ғәскәрҙе еңә һәм дошман карабләрендә өйҙәренә ҡайтып китә. Һөйөү һәм ышаныс бына шундай мөғжизәләр тыуҙыра. Тарихта яҙылған карабләр тураһында тағы бер ваҡиға бар. Плутарх яҙыуынса, Троя ҡыйратылғас, Троя ирҙәре ҡасып ҡотолорға итеп, портта торған карабләргә йүгерә. Ләкин уларҙың ҡатындары быға юл ҡуймай: улар карабләрҙе яндыра, һәм ирҙәргә дошман менән алышҡа инеүҙән башҡа сара ҡалмай..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Илгиз ИШБУЛАТОВ,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@mail.ru**
«ПечатниК» яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте типографияһында баҫылды (450059, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Комсомол урамы, 27/1).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 24 март 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 5207
Заказ - 579/03